*Таңсулпан ҒАРИПОВА*



# Ғилмияза

## драма

(биш шаршауҙан)

**Садиҡ** — Ғилмиязаның һөйгәне.
**Бикбау** — Үҫәргән ырыуы бейе.
**Иҫкебей** — Бөрйән ырыуы бейе.
**Хазина** — Бикбауҙың оло ҡатыны.
**Ҡыҙрас** — уның бер туған ағаһы.
**Ғәмбәрә** — Бикбауҙың икенсе ҡатыны.
**Ҡыҙбикә** — өсөнсө ҡатыны.
**Исмәғил** — Ғилмиязаның атаһы.
**Сәғилә** — Ғилмиязаның үгәй әсәһе.
**Хоҙағабәндә, Әүәлбай, Утарбай** — ҡаҙаҡ егеттәре.
**Айбикә** — ҡаҙаҡ ҡарсығы.
**Килеҡаш** — баҡсы, Бикбау йорто кешеһе.

Күмәк күренештәрҙә егеттәр, ҡыҙҙар, килендәр, ҡурайсылар һәм йырсылар. Ваҡиға XVI быуаттың икенсе яртыһында бара.

## Пролог

*Ҡыҙҙар, егеттәр тауға “Бүҙәнә” уйынына сыҡҡан. Көлөшәләр, йырлашалар, таҡмаҡ әйтеп, ҡумыҙ сиртеп бейешәләр.*

**Егеттәр.** Йомро һорғолт бүҙәнә
Көмбай буйлап килә лә
Бер-ике үпһәң, кинәнә,
“Тағы үп”, — тип инәлә.
**Ҡыҙҙар.** Бүҙәнә итен бешереп,
Саҡырығыҙ ҡунаҡҡа.
Һөйләшербеҙ аулаҡта,
Яҡын ара булһаҡ та!
**Егеттәр**. Бүҙәнә итен ашар инем,
Телемде ҡуша йотмаһам,
Үкенескә ҡалмаҫ ине —
Ҡосаҡлашып йоҡлаһам!

*Яҡында кәкүк саҡыра. Араларынан берәү — ул Ғилмияза — кәкүк тауышына иғтибар итә.*

**Ғилмияза.** Кәкүк! Кәкүк! Әйтсе, зинһар!
Ғүмер юра Ғилмиязаға!
Сәскә төҫлө генә ғүмеркәйем
Үтеп китмәҫ микән заяға?!

*Кәкүк тауышы инде икенсе яҡта ишетелгәндәй, Ғилмияза албырғай, уға эйәрә, тиңдәштәренән айырыла.*

**Ғилмияза.** Кәкүк! Кәкүк, тим! Һин ҡайҙа?! Кәкүк! Ах, ниндәй сыңрау, ниндәй моң, ҡайҙан килә был сихри ауаз?

**Бикбау.** Кәкүк!

**Ғилмияза** *(ағас артына йәшеренә).* Уй!

**Бикбау.** Әллә ҡурҡыттым инде. Кәкүк тә, кәкүк тип саҡырған булаһың, үҙең дә шул күк кәкүктәй генә икәнһең. Ҡыҙыҡай, сыҡ, ҡурҡма, мин айыу йәки бүре түгел.

**Ғилмияза.** Күк кәкүктәр ҡурҡмай бүреләрҙән.
Улар өсөн үлем — төйләгән!

**Бикбау.** Төйләгән? Төйләгәнде уны, беҙ — хәҙер!

*Ян керешен тарта, Ғилмияза ла, Бикбау ҙа осҡан уҡ артынан күккә төбәлә, баяғы сыңрау көслөрәк яңғырай һәм уларҙың аяҡ аҫтына атылған аҡҡош килеп төшә.*

**Ғилмияза.** Аҡҡош?! Ай, ағай, харап иттең дәһа ҡошҡайҙы!

**Бикбау.** Мин бит... Төйләгәнгә төҙәп атҡайным! *(Ул эйелгәндә Ғилмиязаның муйынынан төшкән хәситәне күреп ҡала.)* Хәситәң, ахыры, бик ауырҙыр, сибәр ҡыҙ, элмәге лә күтәрмәҫлек булғас...

**Ғилмияза.** Ауыр булһа ла, иң ауыры ул түгел, ағай!

**Бикбау.** Мин күтәрә алмаған йөк, мин эшләй алмаған эш юҡ донъяла, сибәркәй! Теләйһеңме, анау өйөрҙәге аҫау айғырға һә тигәнсе йүгән кейҙерәм? Теләһәң, бынау имәнде…

**Ғилмияза**. Беләк менән түгел, йөрәк менән күтәрә торған йөктәр бар, ағай.

**Бикбау.** Һин мине таныманың, ахыры, ҡыҙыҡай. Исемем — Бикбау. Дарманға ла, дәрткә лә булмышым бай!

**Ғилмияза.** Мин таныным һине, бей ағай! Әммә бейҙәрҙең дә хәленән килмәҫ өсәү бар: ташҡынға йүгән кейҙереү, рухҡа бығау һалыу, ҡандан һыуһын яһау мөмкин түгел, ағай!

Яҡында ғына "Бикбау! Һин ҡайҙа?" тип ҡысҡырған ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелә.

**Бикбау.** Мин — хәҙер! Ғәфү ит, һеңлем, уйламағанда килеп ҡаптым ҡандай бәләгә…

**Ғилмияза.** Ап-аҡ ҡаурый остарынан
Устарыма тама ҡып-ҡыҙыл ҡан…

## Беренсе шаршау
## Беренсе күренеш

Бикбау йәйләүе. Әллә ҡайҙарға тирмәләр теҙелеп киткән. Ялсылар ҡаҙан аҫа, кеме ат башы, кеме тояҡтар өтә. Йылҡы сырҡыраған, ҡолон кешнәгән, һыйыр мөңрәгән, һарыҡ баҡырған тауыштар ишетелә, бер төркөм малайҙар уҡ атыу буйынса ярыша. Бындағы ығы-зығыға ҡарағанда ниндәйҙер оло йыйынға әҙерлек барғаны күренә. Тирмәнән Бикбауҙың оло ҡатыны Хазина сыға. Төбәлеберәк ҡарап байрамға әҙерлекте байҡағанында ағас күләгәһендә төҙәнеп-биҙәнеп ултырған көндәштәрен күреп ҡала.

**Хазина.** Былар ни… Бер кеше бишкә ярылырҙай мәлдә! Эй, Ғәмбәрә! Ҡыҙбикә! Килегеҙ әле бында!

**Ғәмбәрә.** Аталары бөгөн беҙгә эшләмәһәгеҙ ҙә ярай, тине!

**Ҡыҙбикә.** Эйе, үҙе шулай ҡушты!

**Хазина.** Үгеҙ үлһә, ит, арба ватылһа, утын шул һеҙгә...

**Ҡыҙбикә.** Баҡшы... Килекаш... эсеңдә бала ятҡанын күрәм, тине әле! Ауыр көнәктәр күтәрә алмамдыр бынан кире, өлкән байбисә!

**Хазина.** Эй! Эй-й!.. Үҙе ҡайҙа? Күренмәнеме?

**Ғәмбәрә.** Үҙе әле генә ошонда ине, һине һораны...

**Ҡыҙбикә.** Саҡырып киләйемме? Йүгереп кенә!..

**Хазина.** Кәрәкмәй. Йүгермә. Ауырың төшһә, тағы минән күрерһең!

**Ҡыҙбикә.** Уй, байбисә, мунсағың!..

**Ғәмбәрә.** Үҙе Ҡазандан алып ҡайтҡандыр әле!

**Ҡыҙбикә.** Миңә лә бер баулыҡ бирһәңсе, байбисә...

**Ғәмбәрә.** Ошо Ҡыҙбикә булһа, үҙенә генә һорар ҙа торор...

**Хазина.** Мунсаҡ кәрәкме? *(Кеҫәһенән алып.)* Мәгеҙ! Кем алыҡ! Ха-ха-ха!

Бикбау инеп быларҙы ҡарап тора.

**Бикбау.** Шуларҙы мәсхәрә итеүҙән ҡасан туҡтайһың, Хазина?

**Хазина.** Ике тиленән миңә көндәш яһар саҡта уйлар инең был хаҡта, Бикбау.

**Бикбау.** Ошо саҡлы матурлығың, буй-һының менән һин дә көнләшкәс…

**Хазина.** Йә, ярай инде, атаһы... Мин бит былай ғына...

**Бикбау.** Әгәр йыйын мин тигәнсә матур үтеп китһә, теге Мәкәрйә баҙарынан алып ҡайтҡан кеш тун һинең иңеңә насип булыр, өлкән байбисә.

**Хазина.** Эй! Атаһы! Һеҙ барған Ҡазан ҡалаһына Аҡ батша хәләл ефете менән килгәйнеме? Батшабикәнең кейемдәре нисек, хәтәр шәптер инде?

**Бикбау.** Нисек тип... Һәр хәлдә минең күҙгә һинән матурыраҡ кейенгән, һинән сибәрерәк, һинән һомғолораҡ бисә салынманы.

**Хазина.** Уй, атаһы! Әйткәндәй, Иҫкебей йәйләүенә киткән кешеләр…

**Бикбау.** Әллә ҡайттылармы? Ни хәбәр бар?

**Хазина.** Ниндәйҙер ал бирмәҫ ҡара саптар хаҡында салыу-сарпыу хәбәр ишеткәндәр. Йәнә йыраусылары… Хәтерем яңылышмаһа, Ғилмияза, ахыры, исеме…

**Бикбау.** Ғилмияза?!

**Хазина.** Әллә… беләһең?

**Бикбау.** Күргәнем юҡ, мәгәр күп ишеттем. Ҡатай — дауға, бөрйән — яуға, тигәндәй... Ҡарыу йырҙары менән үҙенең елегенә үткән йыраусыһын алып килә икән Иҫкебей... Бит белеп тора Аҡ батшаның мине бейҙәр өҫтөнән баш иткәнен! Бергәләшеп халыҡты тупланыҡ, бергә сәфәр сыҡтыҡ, бергә ярлыҡ алып ҡайттыҡ. Ә минең өҫтөнлөктө күтәрә алмай ҡарт төлкө...

**Хазина.** Йә, ҡуй, өҙгөләнмә! Иҙел кисмәй, итек сисмәй торайыҡ, атаһы!

**Бикбау**. Ҡарап ҡарарбыҙ: һин Иҫке булһаң, мине Бикбау тиҙәр. Болан мөгөҙөн буран түгел, һыуыҡ һындыра!

Килеҡаш инә.

**Килеҡаш.** Тал төбөндә ятабыҙ,
Быж-быж ҡурай тартабыҙ.

Киләләр! Иҫкебей килә!

**Хазина.** Иҫкебейҙе усаҡлыҡта ҡаршылау килешмәҫ, хужам. Атының башынан ялсылар түгел, үҙең алғаның хәйерле булыр.

**Бикбау.** Иртәләгән ҡарт төлкө... Хәйерлегә булһын...

**Килеҡаш.** Байбисә Хазина! Ҡыҙҙарҙың матуры Бөрйәндә икән, байбисә! Ым-м-м... их ҡына-а-а! Ҡалаҡҡа ғына һал да йот та ҡуй бына! Араларында бер һары сәслеһе бар... Шундай сибәр, ҡәһәрең, шундай һомғол — әллә ен, әллә инде бәрей!

**Хазина.** Ниндәй йылға һыулайҙар? Һораманыңмы?

**Килеҡаш.** Һорарға иткәйнем, ул уйнаҡлап һыу буйына йүгерҙе лә күҙ яҙлыҡтырҙы, ә мин былай саптым... Һыуға килгән еңгәләрҙең…

**Хазина.** Килеҡаш… сарығың тим… туҙған икән һинең…

**Килеҡаш.** Эй-й-й... Кейһәң, туҙа, киймәһәң, аяҡҡа шырау инә...

**Хазина.** Тирмә ишеген ас әле...

**Килеҡаш.** Сарыҡ! Өр-яңы сарыҡтар! Байбисә! *(Бейей, сарыктарҙы, байбисәнең елән сабыуҙарын үбә.)*

**Хазина.** Йә, йә... Тоғро хеҙмәт иткәндәргә әйбер йәлме әллә? Ана, бында табан кемдер килә. Һин теге йоҡо мискәләренән — байбисәләрҙән — күҙеңде алма. Ят бауырҙарға артыҡ хәбәр һөйләп ташламаһындар, Килеҡаш ҡустым.

**Килеҡаш.** Остом, байбисә! Тоҡойҙом!
Һыуға килгән еңгәләрҙең
Имсәгенән, тфү… итәгенән тартабыҙ!

*(Сарыктарҙы кейеп, бейеп, уйнаклап сығып китә.)*

Ығы-зығы, ҡунаҡ ҡаршылап йүгерешеүҙәр йышая. Хазина әле бер, әле икенсе усаҡ янына килә, фармандар бирә. “Утыңды ауалата яҡма, килен!” “Һурпаның һөҙләгән һөҙҙөңмө?” “Тултырмаңды тиш, һытыла бит!” “Килендәр, һабаларға ҡымыҙ тултырығыҙ!” “Буҙаңды һөҙҙөңмө, йәш килен?”
Ҡыҙрас инә.

**Хазина.** Уй! Мәшәҡәт күбәйеп, ағайымды күрмәй ҙә торам...

**Ҡыҙрас.** Һаумы, ҡарындаш, шәп ятаңмы? Әттәгенәһе... Берҙән-бер ҡарындашым...

Күләгәгә ултырып, доға ҡылалар.

**Хазина.** …Үә фил әхирәти хәсәнәтән әр-хәмәр-рәхимин... Шәплек шул инде, ағай, кейәүең Аҡ батшанан тарханлыҡ дәрәжәһе алып ҡайтыуы хөрмәтенә йыйын йыйҙы бына.

**Ҡыҙрас.** Иҫкебей ҙә йыйын йыйырға уйлап йөрөй ине. Бикбау кейәү, йәшерәк кеше, өлгөрөрәк булып сыҡты. Әттәгенәһе.

**Хазина.** Мал-тыуар, йорт-ил именме, ағай?

**Ҡыҙрас.** Әле Бикбау кейәү менән шул хаҡта һөйләшеп торҙоҡ. Ялпы яманлауҙан бушамаҫ тигәндәй, уға ярап буламы?

**Хазина.** Уларға ни етмәй?

**Ҡыҙрас.** Беҙгә нуғай ни ҙә, урыҫ ни: икеһе лә талпан кеүек ҡаҙалып алалар ҙа ҡанды һуралар, тиҙәр. Бикбау кейәүҙең Ирәндектәге ҡуртым[1] ерҙәрен кире ҡайтармауына ла төрттөрәләр.

**Хазина.** Эй был халыҡ! Изгелектең ҡәҙерен белмәйҙәр! Бикбау, Шаҡман, Мишәүле, Иҫке кеүек аҫыл ирҙәр Аҡ батшаға барып баш һалмаһа, ҡаҙаҡтарҙан таланып, миктәп бөткәйнек бит! Ә Иҫкебей ни ти? Ниңә Бикбау бейҙе, арҡадашын, яҡлап һүҙ әйтмәй?

**Ҡыҙрас.** Әллә инде, тәҡәте ҡороно уның да, етмәһә, йыл ҡоро килде. Иң яҡшы көтөүлектәр Бикбау ҡулында, тип зыулай халыҡ. Ҡаҙаҡтар ҙа һаман этләшә. Иманын урыҫҡа һатты башҡорт бейҙәре тип, ҡаты тешләшә. Кисә генә бер өсәүһен тотоп, бикләргә ҡуштым мөгәрәпкә.

**Хазина.** Беҙҙең малдың күбеһе Ирәндек буйында... Күңелгә шом һалдың әле, Ҡыҙрас ағай! Асыуланғандан хасланған яман!

**Ҡыҙрас.** Ай әттәгенәһе, байрам кәйефен ебәрһәм, ғәфү ит, ҡарындаш. Бер йүне табылыр әле. Кейәүҙе әйтәм, һай-һай, ихлас тотонған, ҙур-ҙур түрәләрҙе саҡырған.

**Хазина.** Тырыштыҡ инде. Ҡунаҡ бит өндәшмәй таптыра.

**Ҡыҙрас.** Мин китәйем инде. Байрам кәйефен боҙҙом, шикелле, әттәгенәһе…

**Хазина.** Абау, ағай, сапаның...

**Ҡыҙрас.** Арыу ғына күренгән кеүек ине, әттәгенәһе!

**Хазина.** Үҙеңдән арыуҙар араһында буяуы уңды ла ҡуйҙымы?

## Икенсе күренеш

Аҡ сатыр аҫтында төрлө яҡтарҙан йыйылған дәрәжәле ҡунаҡтар, байбисәләр тора. Йыйын башланыуын белдереп, һорнай ҡысҡырталар. Бикбау алға сыға.

**Бикбау.** Йәмәғәт! Беҙ, йәғни ошондағы башҡорт бейҙәре, урыҫ дәүләтенә үҙ ихтыярыбыҙ менән ҡушылыуыбыҙ хаҡында падишаһтан Грамота алып ҡайттыҡ һәм ошо Килешеүҙе Мәскәү кенәгәһенә теркәттек. Һәм шуның менән халыҡты Себер, Ҡазан, Нуғай хандары иҙеүенән, ерҙәребеҙҙе баҫып алып, ҡатындарыбыҙҙы, балаларыбыҙҙы ҡол итеүҙән йолоп алып ҡалдыҡ. Башһыҙ илдә бәрәкәт юҡ тигәндәй, билдәле, һәр эштә башлыҡ һайлана. Мөхтәрәм бейҙәр, йәғни беҙ, кәңәшләшкәндән һуң, ил-йорт эштәрен етәкләү миңә йөкмәтелде. Ошо ваҡиға хөрмәтенә йыйҙым мин бөгөнгө йыйынды. Йыраусылар йыр бәйгеһендә, көрәшселәр майҙанда көс һынашыр, ил ағалары фекер туплар, кәңәш-төңәш ҡорор, ә хәҙер, борондан килгән тәртип буйынса, йыйынды ат сабышынан башлап ебәрәйек!

**Халыҡ.** Шулай булһын. Аттар килә лә инде!

**Бикбау.** Алмасыбар! Беҙҙең ат! Иҫкебей, ахыры, атың өсөн һис кенә лә борсолмайһың? Күрәһеңдер: Алмасыбар үксәһенә баҫып килә Ҡара айғырыңдың…

**Иҫкебей.** Дөрөҫ әйтәһең: борсолмайым. Бәйгелә еңелер ат менән йыйынға килеп йөрөмәҫ Иҫкебей!

**Тауыштар.** Ҡарат! Ҡарат алға ташланды! Оса бит был! Ат түгел, дөлдөл! Толпар затынан, ахыры, был!

**Йәштәр.**
Йомро матур тояғыңды
Дағалармын, юрғам.
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Төшөрсәле, юрғам!
Һайт, ҡара юрғам,
Тайт, ҡара юрғам!

**Тауыштар.** Ҡарат! Ҡарат! Һөйөнсө, Иҫкебей! Һөйөнсө!

**Иҫкебей.** Һөйөнсөһөнә — биш баш тыу һыйыр, биш батман ҡымыҙ!

**Тауыштар.** Афарин, Иҫкебей! Афарин! Йомарт бейгә — дан! (Уны һауаға сөйәләр).

**Бикбау.** Күпме әҙерләндем! Ҡайҙан ғына йыйманым сабыш аттарын! Һуйҙырам! Ҡыу башыңа һайыҫҡан ояlаһын, Алмасыбар!

**Иҫкебей.** Ат хурлаған тай менер, тай хурлаған тайаҡ менер, ти, кем, Бикбау бей!

**Бикбау.** Ат яҡшыһы алға сығыр, алға сыҡҡан данға сығыр. Һине ана нисек данлайҙар!

**Иҫкебей.** Атына ҡарама, затына ҡара, тиҙәр түгелме?

**Бикбау.** Һай, Иҫкебей! Төрттөрәһең! Затлы нәҫелдән икәнеңде, ахыры, йоҡлағанда ла онотмайһың! Әммә минең дә бит ырыу ағасының тамырҙары әлмисаҡтан килгәнен беләһең!

**Иҫкебей.** Атың юғалһа ла, йүгәнең ташлама тигәндәй, тәуарихҡа күсеп, йыйындың теҙгенен ҡулдан ысҡындырмайыҡ! Йыраусылар саҡырғанһың, тиҙәр йыраҡтарҙан...

**Бикбау.** Һине лә буш килмәгән, тиҙәр...

**Иҫкебей.** Әллә тағы... Бына Ҡыҙрас, ҡайнағаң, сыйырсыҡтай ғына бер ҡош килтерҙем тигәйне...

**Бикбау.** Ҡош тиһең инде... Эй, йыраусылар! Байрам дауам итә! Үҫәргәндәр! Ырыуҙаштарым, башлағыҙ бәйгене!

**Тауыштар.** Кунаҡтар йырлаһын башта! Ҡунаҡтарҙы тыңлап ҡарайыҡ!

**Бикбау.** Әйҙә, күрше, Түңгәүер йырауы Рәхимйән, башла булмаһа!

**Рәхимйән.** Һауаларҙа йондоҙ, ай, нисәлер,
Нисә һанаһам, шунса күсәлер.
Нисә генә айҙар, нисә йылдар
Рәхәт күрмәй ғүмер үтәлер…

**Тауыштар.** Афарин, Рәхимйән!

**Бикбау.** Тамъян йырсыһы Ҡәҙерғол майҙан тотмаҡсы!

**Ҡәҙерғол.** Йүгереп кенә мендем, ай, бейеккә,
Күренеп кенә ята күп ерҙәр.
Был донъяҡайҙарҙың шуныһы яман —
Рәхәт күрмәй үлә күп ирҙәр.

**Тауыштар.** Тауышыңдан кинән, Ҡәҙерғол!

**Бикбау.** Аҡмырҙа сәсән ҡайҙа?

Аҡмырҙа һәм ҡурайсылар алға сыға.

**Аҡмырҙа.** Хөрмәтле Бикбау түрә! Тамам елеккә үтеп, талпандай тәнгә ҡаҙалған Нуғай хандарынан һин йолоп алдың беҙҙе! Үҙеңә торошло башҡорт уҙамандарын туплап, һүҙ беректереп, Аҡ батшанан үҙ ерегеҙгә үҙегеҙ мәңге хужа тигән ҡағыҙ алып ҡайттың. Илде таланыуҙан, илбаҫарҙар һөжүменән ҡотҡарыу абруйыңды арттырҙы! Был йырымды һиңә арнап сығарҙым, ҡәҙерле Бикбау тарханыбыҙ!

**Тауыштар.** Йырла, сәсән! Еткер бай һүҙеңде халыҡҡа!

**Аҡмырҙа.** Ҡараңғы ла төндә йөрөгәндә, тимен,
Ай, түрәкәйгенәһе,
Айҙан яҡты таңдың Сулпаны.
Күп илдәрҙә йөрөп табалманым, тимен,
Ай, түрәкәйгенәһе,
Һин икәнһең ирҙең солтаны.

**Тауыштар.** Һа-а-й, көй икән! Афарин, Аҡмырҙа!

**Аҡмырҙа.** Башҡайыңа кейгән түбәтәйең, тимен,
Ай, түрәкәйгенәһе,
Тимгел генә тимгел ағы бар.
Ғаҡылдарың камил, буйың зифа, тимен,
Түрәлеккәй холҡоң тағы бар.

**Бикбау.** Ир икәнһең, Аҡмырҙа! *(Көмөшләнгән йүгән ырғыта.)* Өйөрөмдәге күҙең төшкән юрғаға кейҙер! Эй, егеттәр! Килтерегеҙ аҡ кейеҙ! Баҫтырығыҙ сәсәнде аҡ кейеҙгә!

**Иҫкебей.** Еңеүсене билдәләрҙән алда Бөрйән йыраусыһын тыңлап ҡарау зарурҙыр, кем, Бикбау бей!

**Бикбау.** Ә-ә... Эйе бит әле. Сыйырсыҡ хәтле генә бер ҡош килтерҙем тигәйнең бит әле…

**Иҫкебей.** Аҫыл ҡош ҙур булмай, кем, Бикбау түрә! Алға сыҡ, Ғилмияза!

**Бикбау** *(тертләп һәм бөтә кәүҙәһе менән алға ынтылып).* Ғилмияза?! Һин көс һынашырға килдеңме майҙанға?

**Тауыштар.** Ғилмияза?! Ғилмияза ошомо? Кит, юҡтыр. Был бит… бала ғына!

**Ғилмияза.** Майҙан тотмай — бил ныҡынмай, түрә!

**Бикбау.** Әйт һүҙеңде, йырла, ҡыҙ бала!

**Ғилмияза.** Йөктө беләк менән күтәрһәләр ҙә, һүҙҙе йөрәк менән күтәрәләр. Минең әйткәндәрҙе күтәрергә… йөрәгеңдең көсө етерме, бей ағай?

**Ғилмияза.** Уралып та ятҡан, ай, Ирәндек
Бикбау малы менән ҡапланған.
Сәскәләре бөткәс тәй ҡырлас тауҙың
Йәмкәйҙәре китеп тәй саңланған.
Ирәндеккәй тауҙың дай, ай, буйында
Ауыл-ауыл тирмәләр теҙелгән,
Күпкәйҙәре йәмһеҙ, йолҡош шундай,
Уйым-уйым кейеҙе өҙөлгән…
Ирәндеккәй алтын, һыуыбыҙ һалҡын,
Һаҡмар һыуы кеүек һыу ҡайҙа?
Үҙе генә батыр, теләге матур,
Бей нәфсеһен тыяр ир ҡайҙа?

**Хазина** *(Ҡыҙраска).* Кейәүеңде мәсхәрә итеү өсөн килтерҙеңме, ағай, был ҡыҙыңды?

**Тауыштар.** Ил ауыҙын иләк менән томалап булмай, Ғилмияза дөрөҫ йырланы! Халыҡ шәп көтөүлектәрҙән яҙҙы!

— Афарин, Ғилмияза! Бына, исмаһам, сәсән!

— Ил күрке бей һынлы бейгә арнап ҡарыу йыр йырланғанды ҡасан күргәнегеҙ бар?! Ауыҙын ҡыл менән тегер кәрәк Ғилмиязаның!

**Иҫкебей.** Йырҙың йыртығы юҡ, йәмәғәт!

**Тауыштар.** Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул! Һеҙ бит Үҫәргән илендә!

— Ғилмияза — Ил ҡыҙы! Афарин, Ғилмияза! Беҙҙең хәсрәтте әйтте был бала!

**Иҫкебей.** Бер күктә ике ай булмай, Бикбау бей! Еңеүсене иғлан ит халыҡҡа!

**Бикбау.** Вәғәҙә — иман, һылыу ҡыҙ! Йөрәгемдең көсөн күрһәтер мәл етте, ахыры! Эй, көрәшселәр! Күтәрегеҙ ҡыҙҙы! Аҡ кейеҙгә баҫтырып, күрһәтегеҙ халыҡҡа еңеүсене. Иллә мәгәр *(башынан бүркен йолкоп ала)* Бөрйәндең Ҡаратын үтерлек ат, Ғилмиязаны еңер йыраусы тапмаһам, исемем Бикбау булмаһын! *(Бүркен ергә һуға.)*

**Иҫкебей.** Ғилмиязаны бары Ғилмияза ғына еңә ала!

**Йәштәр.**
Ат яҡшыҡайҙары, ай, ҡара ат,
Аҡса биреп һатып алайыҡ.
Йәнкәй ҙә, ай-һай ҙа,
Былбыл булып һайрай ҙа…
Был ғүмеркәйҙәр беҙгә ике килмәҫ,
Уйнап-көлөп кенә ҡалайыҡ.
Йәнкәй ҙә, ай-һай ҙа,
Былбыл булып һайрай ҙа…

Уйын-көлкө артҡы планға күсә.

**Иҫкебей.** Аттарҙы ярыштырҙыҡ, йыраусыларҙы тыңланыҡ — инде ҡайтышһаҡ та булалыр, Бикбау түрә?

**Бикбау.** Ул ни тигән һүҙ?! Аҡ тирмәмдә һеҙҙең хөрмәткә табын әҙерләнгән. Хазина! Бисәләр! Кәрәк саҡта өсөһөнөң береһе юҡ!

**Хазина.** Ни булды? Мин ни... быңдасы!

**Бикбау.** Өсөгөҙгә бер юлы “талаҡ” ҡысҡырырмын, ахыры!

**Хазина.** Терпе йотҡан айыуҙай үрһәләнмәсе, атаһы?! Аш-һыу етерлек, ашнаҡсылар йүгереп йөрөп ҡунаҡ атҡарыша.

**Бикбау.** Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ! Аҡ тирмәгә рәхим итегеҙ! Табын өсөн һин яуап бирәһең, Хазина!

Барыһы ла сыға. Хазина эргәһендә Килеҡаш ҡына ҡала.

**Хазина.** Ҡунаҡ атҡарған ғына бар, атаһы! Ах! Йөрәгем урынынан ҡупты!

**Килеҡаш.** Тыныслан, байбисә! Юғиһә, ҡотоң үҙеңдән ике арҡан буйы ары һикерҙе. Табып бирәйемме?

Ҡорой ҡотом, кил, ҡотом,
Байбисәгә ныҡ тотон…
Кил ҡотом, кил ҡотом!..

**Хазина.** Эй Килеҡаш! Ҡотоң ғына түгел, йәнең ташлап сығыр тәнеңде! Күрҙең дәһа: бей үҙен мәсхәрә иткән ҡыҙҙы бөтә ғәләмде аптыратып аҡ кейеҙгә баҫтырҙы!

**Килеҡаш.**
Теге һылыу ҡыҙҙы! Минең күҙ төшкән ҡыҙҙы!
Һыуға килгән һылыуҙарҙың, их!

*(Артығын ыҫҡындырып, байбисәнең асыуына тейеүҙән, унан бигерәк яңы сарыҡтары өсөн борсолоп, Килекаш арткарак сигә).*

Һыуға килгән һылыуҙарҙың… итәгенән!

**Хазина.** Һинең генә күҙең төшһә икән!.. Ах, Килеҡаш, тап әле шул ҡыҙҙы, саҡыр минең янға...

**Килеҡаш.** Тоҡойҙом, байбисә! Һин уны миңә димләй күр, байбисә! Мин — остом! Бей "талаҡ" әйтһә, мин һине лә алырмын, йәме, байбисә! Ҡайғырма, байбисә! *(Юғала.)*

Ҡыҙрас инә.

**Ҡыҙрас.** Ҡунаҡтар һурпа һорай, Хазина!

**Хазина.** Һурпа һөҙөлгән, ана, индерәләр ҙә инде.

**Ҡыҙрас.** Әттәгенәһе... Ығы-зығынан бушап, һорашҡан да юҡ. Кейәү менән арағыҙ нисек?

**Хазина.** Көндәшленең төнө генә түгел, көнө лә уртаҡ, ағай.

**Ҡыҙрас.** Шөкөр, шөкөр ит, ҡарындаш! Бикбау кейәү көндәштәреңдең үҙҙәренә түгел, аталарының малына, малынан бигерәк еренә өйләнде. Һин бит бында, әттәгенәһе, бейҙең үҙенән ҡала икенсе хужа! Ул яғына зарлана алмайһың, Хазина!

**Хазина.** Иншалла, әлегәсә бары ла мин тигәнсә булды. Ирем минең менән кәңәшләшмәйенсә кәртә башы ла ҡайырманы. Сәфәр сыҡҡан ерҙәренән бүләкһеҙ ҡайтманы, йыйындарҙан мине ҡалдырманы. Әлегәсә, эйе, шулай булды! Ә бөгөн... Ана, үҙе килә! Ғилмияза... Китеп торсо, ағай, саҡ ҡына.

Ҡыҙрас йәшеренә, Ғилмияза менән Килеҡаш инә.

**Килеҡаш** *(таяк атланған).* Тр-р-р, дөлдөл! Килтерҙем, Хазина байбисә! Осортоп алып килдем Ғилмияҙаны!

**Ғилмияза.** Мине саҡырҙыңмы, байбисә?

**Хазина.** Ғилмияза... Ҡайҙалыр күргән дә кеүекмен...

**Ғилмияза.** Миндә лә шул тойғо.

**Хазина.** Беҙ яҡташтар икән. Кем ҡыҙы булаһың?

**Ғилмияза.** Әсәм Ғәйшә абыстай ине. Вафатына уның ете йыл үтте. Атам — Исмәғил. Сәғилә исемле ҡатын алып йәшәй.

**Хазина.** Сәғилә?! Бергә уйнап үҫтек. Әхирәттәр инек.

**Ғилмияза.** Сәләм күндерермен. Күптән күп!

**Килеҡаш.** Һин шундай матурһың! Әллә бәрейһең инде, әй?! Толомоңдо саҡ ҡына тотоп…

**Хазина.** Үҫкәнһең, бешкән емеште оҙаҡ тотоп булмай ботаҡта. Яусылар йөҙәтмәйме атаңды?

**Ғилмияза.** Баламды һөйөп туя алмай китәм — һөйгәненә барһын Ғилмияза тигән әсәм васыятын боҙа алмай атам! Мин ирекле ҡош, байбисә!

**Хазина.** Ярлы кеше ғорур була алмай, ҡыҙыҡай! Бына берәй бай кеше килер ҙә, ҡыҙыңды мин алам, тиһә, нишләр атаң?

**Ғилмияза.** Ситлеккә япһаң, ҡош та бит һайрауынан яҙа. Йырһыҙмоңһоҙ ҡалһа, кемгә кәрәк Ғилмияза?!

**Килеҡаш.** Миңә! Миңә кәрәк! Бейҙең бисәһе — өсәү, Иҫкенеке хатта дүртәү, тиҙәр! Ә миңә — берәү ҙә юҡ! Әйт, Хазина байбисә, Килеҡашҡа кәләш бул, тип әйт Ғилмиязаға!

**Ғилмияза.** Киле-киле-килеҡаш, үҙе иҫәр, үҙе ҡаш!

Ул арала "Ғилмияза!" тип ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелә, ҡыҙҙар инә.

**Ҡыҙҙар.** Ғилмияза, әйҙә тиҙерәк "Бүҙәнә" уйнарға!
**Килеҡаш.** Мин тиле түгел. Туҡта әле, Ғилмияза! Мин әле (биленә ҡыҫтырылған сарыҡтарын кейә башлай). Мин хәтәр бейеүсе лә! Һинең ҡаршыңда бына шулай тыпыр-тыпыр бейеп кенә торормон!
**Ғилмияза.** Килеҡаш! Күҙе бысый, башы таш!
**Ҡыҙҙар.** Ха-ха-ха! Ай, Ғилмияза, кейәүең!
**Ғилмияза.** Аяҡтары һелкеүестәй, күҙе аҡыш, башы — таш!

Ҡыҙҙар, Ғилмияза сығалар, Килеҡаш уларға эйәрә.

**Килеҡаш.** Туҡта, Ғилмияза, ултыр минең дөлдөлгә, Ғилмияза! *(Сыға.)*

Йәшенгән еренән Ҡыҙрас сыға.

**Ҡыҙрас.** Бар шунан, һөйләш был ҡыҙ менән! Тфү! Эт ашағыһыҙ шул теле булмаһа!..

Бикбау һәм Иҫкебей инә.

**Иҫкебей.** Эй, ҡустым, кем, Ҡыҙрас! Ат ҡайҙа?
**Ҡыҙрас.** Әттәгенәһе!
**Иҫкебей.** Үҙ өйөңдәгеләй йәйелгәнһең! Ҡарат ҡайҙа тим?!
**Ҡыҙрас.** Яңғыҙ ҡарындашым бит...
**Бикбау.** Ха-ха-ха! Һуңлап иҫеңә килдең, Иҫкебей! Ҡаратыңды минең егеттәр дауырғыған ала бейәмә ҡушты инде! Ә Ғилмияза кеүек йырсы ҡошҡа беҙҙең Һүрәм буйында ла ҡунып һайрар тал табылып тора...
**Иҫкебей.** Ҡошто тал түгел, ҡош үҙе һайлай талды, Бикбау бей! Сәсәнһеҙ илдең күрке юҡ! Ул — ил ҡыҙы!
**Бикбау.** Иренә хеҙмәт иткән — иленә хеҙмәт иткән. Мин яусы ебәрәм Ғилмиязаға!
**Хазина.** Ах!
**Иҫкебей.** Бер арыҫлан айға менәм тигән икән — аяғын һындырған! Байрам бөттө. Йыйығыҙ халыҡты! Ҡыҙрас! Еткер барыһына — ҡайтышабыҙ! Ғилмияза үҙебеҙҙән артмай... Йома көн туйыма рәхим ит, Бикбау бей! Эйе! *(Сығалар.)*
**Бикбау**. Тәкә һөҙөп, тауҙы ауҙара алмай, тотҡан ерҙән һындыраһың, бей! *(Арттарынан сыға, Ҡыҙрас уларға эйәрә.)*
**Хазина.** Ағай! *(Тирмәнән алтын уҡалы йәшел сапан сығара.)* Ах, ағай! Бынау сапанды кейеп ҡара әле, ағай...
**Ҡыҙрас.** Ләхәүәллә! Бохара сапаны!
**Хазина.** Йыйында өҫтөңә ҡарап оялып торҙом. Ай! Ҡайһылай килешә! Берсә ун биш йылға йәшәрҙең! Әҙәм күрке — сепрәк, тип белмәй әйтмәгәндәр, күрәһең…
**Ҡыҙрас.** Әттәгенәһе… Уҡалары, ахыры, алтындан...

**Хазина.** Кейәүеңдең табаны аҫтына ут ҡапты, ағай! Теге саҡ Ирәндек буйҙарын кейәүеңә ҡуртымға биреп, абруйымды күтәрҙең. Шул изгелегең менән минән әйтһә — иренә һүҙе үтерлек, һөйләһә — сере һыйырлыҡ байбисә яһаның!

**Ҡыҙрас.** Һин бит минең берҙән-бер ҡарындашым, әттәгенәһе!

**Хазина.** Мин һинең ярҙамыңа йәнә мохтажмын, ағай!

**Ҡыҙрас.** Мин… әттәгенәһе...

**Хазина.** Бикбау күҙҙәреңдә быҒаса һис күренмәгән осҡондар уйнай! Был йәштә ирҙәр ғашиҡ булһа, бөтә донъяларын онота. Илдең биле Нуғай иҙеүенән миктәп, бөлгән сағы. Халыҡтың барсаһы ла урыҫ батшаһына ҡушылғанды хуп күрмәй. Бикбау ил билен нығытаһы урынға ғиш-ғишрәт утына сумасаҡ! Йөҙөк өҫтөндәге ҡаштай Иҫкебей менән Бикбау тархандар араһынан ҡара бесәй үтәсәк! Ил тарҡаласаҡ! Күңелем һиҙә — был никах бер кемгә лә бәхет килтермәйәсәк!

**Ҡыҙрас.** Ахыры, һин кейәүҙе көнләшәһең, ҡарындаш! Сибәр шул, ҡәһәрең, был Ғилмияза! Шул эт ашамаҫ теле булмаһа...

**Хазина.** Сибәр генә булһа, ярты бәлә! Был ҡыҙ Бикбауҙың йөрәген яулаясаҡ!.. Һин… ҡаҙаҡтарҙы… мөгәрәпкә яптым тигәйнең. Уларға… ни кәрәк?

**Ҡыҙрас.** Ҡаҙаҡҡа ни… нимә булһын, мал, йәнә ҡыҙ. Ҡасандыр юғалған өйөрҙәрен йәнә… беҙҙең егеттәрҙән күрәләр…

**Хазина.** Ҡыҫҡаһы, бүренең туҡ, һарыҡтарҙың теүәл булғаны яҡшы, ағайым! Сапаныңды әйтәм, йылы тәнеңдә, йәш кәләш ҡуйынында туҙһын!

**Ҡыҙрас.** Ах!.. Туҡта... Әттәгенәһе... Ай әттәгенәһе...

## Икенсе шаршау

Икһеҙ-сикһеҙ ҡаҙаҡ далаһы. Тирмә алдында Айбикә балаҫ һуға, Хоҙағабәндә саҡсауыл күләгәһе аҫтында сыбыртҡы ишә. Мал баҡырған, эт өргән тауыштар ишетелеп ҡала. Һауала думбыра тауыштары сыңлап киткәндәй. Ҡапыл яҡында ғына башҡорт моңо ағыла башлай.

**Ғилмияза** *(Илау-һыҡтау аша)*.

Үҙ илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...

**Айбикә.** Моңлана истәк ҡыҙы, зарлана ғуй.

**Хоҙағабәндә.** Утарбай ишетһә, тағы ене ҡуба инде.

**Ғилмияза.** *(Үҙе күренмәй.)*

Йәштән генә менгән тура атымдай
Ялбыр яллы аттар ҙа юҡ икән.
Ҡайғыларым тарҡап һөйләшерҙәй
Телем аңлар берәү ҙә юҡ икән…

**Утарбай** *(тирмә эсенән Хоҙағабәндәгә һөйәк менән елсәп)*. Хоҙағабәндә! Эй, ишетәһеңме?

**Айбикә.** Ай, сырағым... Һиңә ни етмәй? Ҡаҡ һөйәк менән оронаһың тағы! Былай ҙа кәртәгә харам мал ингәне бирле донъяның ҡото китте.

**Утарбай** *(йоколо күҙҙәрен ыуа-ыуа тирмәһенән сыға)*. Ҡотто мин түгел, көн-төн бутаһы үлгән нарҙай баҡырған Ғилмияза ебәрә!

**Айбикә.** Табаныңды ярып, ҡыл һипһәләр, йәнә, аяҡтарыңа ҡалып кейҙерһәләр, һин үҙең нисек баҡырыр инең?

**Хоҙағабәндә.** Ғилмиязаны язаларға һинең хаҡың юҡ, уның ире бар.

**Утарбай.** Ир, имеш! Ир йораты! Тфү... Текәбай! Өтөк!

Усаҡҡа яғырлыҡ ҡамыш күтәргән Әүәлбай инә.
Ул, күрәһең, көтөүҙән ҡайтып килә.

**Әүәлбай.** Амандарһығыҙмы?

**Айбикә.** Ай сырағым, ҡайттыңмы? Мал-тыуар именме?

**Әүәлбай.** Имен әлегә. Ғилмияза ҡайҙа? Йырлағаны хатта ишетелмәй.

**Хоҙағабәндә.** Һеҙҙе аңламаҫһың... Һин Ғилмияза йырламай башлаһа ҡоторонаһың, ә Утарбай — йырлай башлаһа… Миңә ҡайһылай ҙа һәйбәт…

**Утарбай.** Ҡара-ҡара, Әүәлбай! Был Текәбайҙың теленән алда теше сыҡҡан!

**Хоҙағабәндә.** Ә һин, ағай, минең бисәгә ҡаныҡма! Бир аҫҡысты! Йә үҙең сис ҡалыбын!

**Утарбай.** У-у, күгәүен! Ҡайһылай әсе тешләшә! Кем арҡаһында ҡатынлы булдың? Маңҡа! Ҡыҙ түгел, ҡуй урларлыҡ рәтең юҡ! Бисәң нисә тапҡыр ҡасты?! Ир йораты! Кем тотоп килтерҙе, көсөк?

**Айбикә.** Ай буҙ бала! Телеңдең ни һөйләгәнен ҡолағың ишетмәй! Йәһәтерәк көтөү ҡашына юлланығыҙ! Эткә ышанып, ҡалған ғына малдан ҡолаҡ ҡағырға итәһегеҙме?! Һин дә, Әүәлбай, алмаш килгәнсе ҡайтмай торор инең...

**Әүәлбай.** Хоҙағабәндә бисә ҡуйынында рәхәтләнһен, ә беҙ мал көтәйек!

**Хоҙағабәндә.** Шыбаға һинең әйтеүең буйынса тотоштоҡ, Әүәлбай! Миңә — бисә, һеҙгә мал тейҙе!

**Айбикә.** Ай алла! Туҡтағыҙсы! Истәктәр ҡыҙҙы үҙҙәре кейеҙгә урап, атығыҙға бәйләп, өҫтәүенә, мал ҡушып биреп ебәрмәһә, тәтер ине ҡыҙ, тәтемәй...

**Утарбай.** Көсөк! *(Әүәлбайҙы осора һуға.)* Һин уйлап таптың шыбағаны! Ағайыңдан уҙып (Хоҙағабәндәне бөрөп ала), һин бисә ҡуйынына инеп яттың!

**Айбикә.** Туҡтағыҙ! Хоҙайҙан ҡурҡығыҙ! Шул харам мал кәртәгә ингәне бирле, күпме мал ҡырылды, һарыҡтарға ҡырғын төштө.

**Утарбай.** Атай үлгәс, йортта мин хужа! Ирҙәр эшенә ҡыҫылаһы булма!

**Хоҙағабәндә.** Үлһәм-үләм, мәгәр... Ғилмиязаға... бармаҡ менән ҡағылһағыҙ...

**Әүәлбай.** Еңгәнең яртыһы — ҡәйнештеке!

**Хоҙағабәндә.** Ах, шулаймы! Йәле, ҡабатла!

**Айбикә** *(асырғанып).* Утарбай! Улым, араларына ин! Ай алла! Тәңрем! Өс бер туған талаша! Ҡанға ҡан туҙыша! Ярҙам ит, Тәңре! Ярабби...

**Утарбай** *(Хоҙағабәндәне ситкә алып осора).* Еттеме?

**Хоҙағабәндә.** Уй-бай... *(Бөгөлөп барып төшә.)*

**Утарбай.** Телеңә һалышмаҫҡа яҡшы булыр. Ә быныһы... *(Әүәлбайҙы өҫкә күтәрә.)*

**Әүәлбай.** Ебәр, ҡарт алаша! Ебәр, тиҙәр һиңә!

**Утарбай** *(ергә һеңдерә һуға).* Булдымы?

**Айбикә.** Йә Хоҙай! Тәңрем! Был ниндәй зилзилә?!

**Әүәлбай.** Ҡулды һындырҙың!

**Утарбай.** Икенсе кемгә ҡул күтәргәнеңде белеп күтәрерһең!

**Айбикә** *(Әүәлбайға).* Туҡта, ҡуҙғалма... Айналыйым минең, сабыйым... *(Тирмәгә индереп алып китә, атлаған ыңғайға һуғышҡанда Утарбайҙың кеҫәһенән төшкән аскыс табып ала.)* Асҡыс? Ҡалып асҡысы... *(Утарбайға бирергә итә лә, кире уйлай — кеҫәһенә һала.)*

Шул саҡ юл тоҡсайы артмаҡлаған ҡарт инә, ул бик алыҫ юлдан килгәнгә оҡшай.

**Ҡарт.** Әссәләмәғәләйкүм, уҙамандар! Кәңәштәр берекһен!

**Утарбай.** Вәғәләйкүмәссәләм!

**Айбикә.** Йә Хоҙай! Күҙемә күренәме, әллә Хызыр Ильяс үҙе киләме?

**Хоҙағабәндә.** Хуш килдең, Хоҙай ҡунағы!

**Утарбай.** Әйт киленгә, һыуһын сығарһын ҡунаҡҡа. Ҡай ерҙәрҙән килеш, уҙаман?

**Ҡарт.** Үткән юлдарымды ҡом ҡаплап бара, артыма әйләнеп ҡарайым тиһәм, ҡара күҙҙән мөлдөрәп йәш аға...

Ғилмияза сыға. Ул көрәгә тулы һыуһын күтәргән. Аяҡтарына ҡалып кейҙерелгән.

**Ҡарт** *(туҫтаҡтағы һыуһынды түңкәрә эскәс).* Ҡайҙалыр йыйынғанға оҡшайһығыҙ, уҙамандар.

**Утарбай.** Көтөүгә...

**Хоҙағабәндә.** Көтөү көтөргә ялланырға ниәтең юҡмы, уҙаман? Эттәр беҙҙең яҡшы тоҡомдан.

**Утарбай.** Һай, өтөк! Ҡунаҡ менән әңгәмәләшер өсөн ағаң бар әле бында! Бар, ана, мал ҡашына!

**Ҡарт.** Эштең береһенән дә баш тартмайым. Күнәк, самауыр, ҡаҙан ямау, ат дағалау, йүгән көмөшләү, беләҙек-балдаҡ һуғыу кеүегенән дә.

**Утарбай.** Ай сырағым! Ҡайҙа өйрәндең? Ҡаҙаҡ араһында һиндәй бик һирәк!

**Ҡарт.** Истәктәрҙән, йәнә аҡ ҡолаҡ урыҫтарҙан. Етем булғас, кем тамаҡҡа ашата, шунда йөрөлдө.

**Утарбай.** Ватыҡ әйберҙәрең килтерең, апа. Улар һиндә байтаҡ йыйылғандыр...

**Хоҙағабәндә.** Ғилмияза, һин беләҙегем һынды, ти инең.

**Ғилмияза.** Ҡашы төштө.

**Ҡарт** *(һиҫкәнеп, Ғилмиязаға укталыбырак карап).* Мин йыр ишеткәйнем алыҫтан. Йыраусыһы әллә ошо баламы?

**Утарбай.** Өҫтөнә баҫтың, ҡунаҡ. Истәк ҡыҙы ул. Бына Хоҙағабәндә ҡустының кәләше.

**Ҡарт.** Рәхмәт һыйығыҙға, хәл инде. *(Ғилмиязаға.)* Килтер, ҡыҙ бала, беләҙегеңде.

**Ғилмияза.** Хәҙер. *(Тирмәгә инеп китә.)*

**Утарбай.** Ә беҙ, ҡустым-күмәс баш, көтөүгә юлланайыҡ.

**Хоҙағабәндә.** Бөгөн Әүәлбайға сират!

**Утарбай.** Телеңә һалышма, өтөк! Бисәнде ҡарауыллап былай ҙа күп ғүмер үткәрҙең! Тиҙерәк йыйын. Апа, үҙең әҙерлә беҙҙе юлға! Ғилмияза ҡыбырлағансы...

**Хоҙағабәндә.** Йәһәт ҡыбырлауын теләгәс, быҒауламаҫ инең! Асҡыс ҡайҙа?!

**Утарбай.** Бына! *(Ҡукыш сығара.)*

**Айбикә.** Ҡарыулашма, Хоҙағабәндә! Әүәлбай ике йома малды бер үҙе көттө.

**Хоҙағабәндә.** Ә Утарбай ниңә алыштырманы? Көн-төн йоҡо һимертеүҙән...

**Утарбай.** Анһат кәрәк һеҙгә! Малды табып биргән етмәгән, көтөү ҙә көтөр кәрәк икән быларға!

**Хоҙағабәндә.** Тағы бер һүҙ әйтһәң...

Ҙур төргәк күтәргән Ғилмияза сыға.

**Айбикә.** Юлға сығыр алдынан ултырып доға ҡыла кеше... *(Доға kылып бөткәс)* Аман йөрөгөҙ, балалар.

**Утарбай.** Бынау көсөгөң һарыуымды ҡайнатмаһа, бары ла яҡшы булыр. *(Сыға, уның екеренә-екеренә ат эйәрләгәне ишетелә.)*

**Хоҙағабәндә.** Ғилмиязаны рәнйетмәгеҙ инде, апа!

**Айбикә.** Бар инде, бар! Утарбайҙың түҙемен һынама! Ай балалар!

**Хоҙағабәндә**. Ғилмияза!.. *(Күренмәҫме типтер инде, артына әйләнә-әйләнә сыға, Ғилмияза kарамай, тирмә эсенә инеп юғала.)*

**Айбикә.** Атаһыҙ — ул, инәһеҙ ҡыҙ көтмә, тигәндәре ошо, ахыры... Бер туған ҡайнағам йәйләү ерҙәребеҙҙе тартып алып, беҙҙәрҙән жатаҡ[2] яһаны. Ерҙән яҙған улдарым хәҙер ил буйлап кеше малына хаслана, хатта *(Ғилмияза яғына kарап)* әҙәмгә ташлана.

Айбикә улдарын оҙата сыға. Әкрен генә эңер төшә, ҡараңғылана, дала төрлө ҡырағай йәнлек, төнгө ауаздар менән тула. Ҡарт усаҡ эргәһендә ватыҡ һауыт-һаба йүнәтеү менән мәшғүл. Уның эргәһендә йондоҙло күккә ҡарап, салкан төшөп, Әүәлбай ята.

**Әүәлбай.** Ни төҙәтәһең ул?

**Ҡарт.** Беләҙек, Әүәлбай.

**Әүәлбай.** Ә уға ни булған?

**Ҡарт.** Ҡашы төшкән.

**Әүәлбай.** Ә ул кемдеке?

**Ҡарт.** Теге әсирә ҡыҙҙыҡы.

**Әүәлбай.** Истәк ҡыҙы. Ниңәлер ул бөгөн йырламай.

**Ҡарт.** Әллә инде йыр яратаһың, Әүәлбай?

**Әүәлбай.** Ғилмияза йырлаһа…

**Ҡарт.** Был сибәрҙе ҡайҙан таптығыҙ? Артығыҙҙан нисек ҡыуа сыҡманылар?

**Әүәлбай.** Үҙҙәре тейәтеп ебәрҙе! Бикбау тигән бейҙәре ҡушты тиеләр.

**Ҡарт.** Бей?! Үҙе?! Булмаҫты...

**Әүәлбай.** Анттыр! Өҫтәүенә, утыҙлап баш йылҡы ҡушып бирҙеләр!

**Ҡарт.** Әкиәт һөйләйһеңдер һин, улым.

**Әүәлбай.** Ант! Бер ҡалаҡ ҡан эстем, бер ҡалаҡ тоҙ яланым! Аттарҙы Утарбай менән бүлешеп алдыҡ. Шыбаға тотҡайныҡ, ҡыҙ Хоҙағабәндәгә насип булды. Хәҙер ул кәләшле. Ә беҙ? Беҙгә нишләргә? Ярай инде, Утарбай — ҡарт алаша. Минең тамырҙарҙа ҡайнар ҡан таша! Нисек, нимә менән баҫырға?!

**Ҡарт.** Уһу! Беләҙек әҙер. Эйәһе йоҡлайҙыр инде был мәлдә? Ҡулыңды әйтәм, ҡайҙа имгәттең?

**Әүәлбай.** Хоҙағабәндә менән һуғышып киттем.

**Ҡарт.** Утһыҙ төтөн булмай, буҙ бала…

**Әүәлбай.** Еңгәнең яртыһы ҡәйнештеке тигәйнем, теге ҡыҙҙы ла китте!

**Ҡарт.** Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша.

**Әүәлбай.** Яраштыҡ инде. Хоҙағабәндә бисәһенән күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа ҡушты.

**Ҡарт.** Ҡайҙа барһын инде ул бала? Тирә-яҡта дала, ас бүреләр.

**Әүәлбай.** Бер нисә тапҡыр ҡасты бит инде ул. Истәктәргә лә ышаныс юҡ… Нуғайым — өлкән ағайым, тип йөрөһәләр ҙә, урыҫ батшаһына барып баш һалдылар.

**Ҡарт.** Ир маҡтана — ҡорамал эшләй. Уҡ-һаҙағың ни хәлдә?

**Әүәлбай.** Үткерләп бир әле остарын... *(Ҡалъяһын ҡарттың алдына һала.)*

**Ҡарт.** Ятып торһон, төндә насар күрәм. Төндән көн яҡшы ундай эштәргә. *(Думбыраһын ала.)*

**Әүәлбай.** Думбыраң бар? Әллә сиртәһең? Их, йырлай йә өзләй белһәм икән!

Ҡарт думбыраһын сиртеп ултыра бирә. Айбикә сыға.

**Айбикә.** Әүәлбай, балам, күҙ һал әле кәртәләге нарға. Бөгөн төндә тейеш ҡолонларға. Бүре тейешмәһен йылы ҡанға.

**Әүәлбай** *(теләр-теләмәҫ кенә күҙгала).* Ярар, апа...

**Айбикә** *(каҙан, бакырса кеүек әйберҙәрен ҡарт алдына килтереп һала).* Бына... Утарбай тоғро һөйләгән: байтаҡ нәҫтә йыйылған.

**Ҡарт.** Беләҙек төҙәтеү — ваҡ эш. Ваҡытты күп ала.

**Айбикә.** Далала ваҡытты сәғәт менән үлсәмәйҙәр, мосафир.

**Ҡарт.** Үткер сыраҡ, һиҙгер йөрәк биргән Хоҙай дала ҡәүеменә, һүҙҙәрең хаҡ.

**Айбикә.** Моңдо әллә нисә саҡрымдан ишеткәс, йөрәгең һинең дә, ай-һай, бик һиҙгерҙер...

**Ҡарт.** Бәндә күңеле ике нәмәгә йылыша: тәүгеһе — ут, икенсеһе — моң.

**Айбикә.** Ана шул, шул!

**Ҡарт.** Төшөнмәнем?..

**Айбикә.** Тоҡанған сыраны итәк аҫтында йәшереп тотоп булмаған кеүек, моңға ла, күрәһең, бығау һалып булмай... Ут тигәс, бер ҡарһүҙ иҫкә төштө. Бер заман, далалағы бөйөк бер хандың илендә ут бөткән.

Хан ут эҙләргә бик күп уҙамандарҙы сығарып ҡараған — тапмағандар. Ахыр сират уның өс улына еткән. Ай йөрөгәндәр былар, йыл — ут юҡ икән. Әптән хәлдән тайған ике улан, өмөттәрен өҙөп, ҡайтып, ата йортона йығылған. Кесе улан ғына бойоҡмаған. Ямғырҙарҙа күшеккән, бурандарҙа туңған, асыҡҡан, ябыҡҡан, әммә бер көндө уның күҙ алдында саҡсауылды йәшен атҡан. Ағас дөрләп яна башлаған! Саҡсауылдан алған осҡондо егет мең михнәттәр менән һүндермәйенсә өйөнә алып ҡайтһа, атаһы донъя ҡуйған, ә уның яңғыҙын ҡалдырып ҡайтып киткән ағалары бер нәмә белмәй, йоҡлап яталар, ти. Йәне көйгән егеттең! Быларҙы ҡыуандырғансы, башта уттың рәхәтен үҙем күрәйем тип, йәшереп тотмаҡ булған ул осҡондо. Һарай эсенә тирмә ҡороп, оло ҡаҙан аҫып, ут яғып, ит бешереп, йылынған һәм йоҡлап киткән.

**Ҡарт.** Әммә иртән элек хан һарайы ултырған урында бары көлкүмер ҡалған, шулаймы?

**Айбикә.** Ах, юламан, бармаҡтың ҡайһыныһын тешләһәң дә... ауырта. Ауырта шул, ауырта... *(Китә.)*

**Ҡарт.** *(Өләң әйткән көйгә.)*

Һөйләһәң һүҙ оҙайыр,
Тыңлаһаң, һинең тағы ла
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер.
Кем булһам да булайым,
Шуны әйтеп уҙайым.
Ил тигәндең кеме юҡ,
Бейе лә бар был илдең,
Ире лә бар был илдең,
Ике арала йөрөүсе —
Теле лә бар был илдең.
Теле лә бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Ҡыҙ алам тип туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең,
Күсе лә бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең,
Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең…

Тирмәнән Ғилмияза сығып тыңлап тора.

**Ғилмияза.** Ах, олатай! Йөрәгемде ҡуҙғаттың. Һүнеп бөтөп барған осҡондар ҡабат терелде. Өмөтөм морнаны. Бына-бына ҡанат яралыр ҙа, бынау Ҡош юлы буйлап Уралыма ҡайтып китермен төҫлө!

**Ҡарт.** Бик йыраҡмы илең, ҡыҙ бала?

**Ғилмияза.** Уралдан мин! Башҡорт иленән! Тауҙары, ҡаялары башы менән болот айҡай. Күлдәрендәге ҡамыштары хатта йырлай! Ә сәскәләр?! Улар һәр таң һайын ысыҡ менән йыуына, ҡояш менән йыуана! Их, олатай! Һағыныуҙарым йөҙөмә һары булып тиртте. Уралымды йәнә саҡ ҡына күрмәй торһам, аҡылымдан яҙырмын төҫлө...

**Ҡарт.** Ә һин... йырла! Һағышты бары йыр баҫа...

**Ғилмияза.**

Ирәндеккәй тауы, ай, ҡырлас тау,
Иҫке менән Бикбау төйәге.
Мине урлатып инде Бикбау бейҙең
Мөрхәтһенде микән теләге?
Алтын ғына Урҙа — ҡомло ялан
Ерһетмәйҙер Урал балаһын.
Минең менән бары серҙәш төҫлө
Юғалтҡандай нарҙай балаһын...

**Ҡарт.** Ғилмияза! Бына һин ниндәй!

**Ғилмияза.** Әллә инде... миңә ... башҡортса өндәштең, олатай?!

**Ҡарт.** Сеү! Ҡурҡма, Исмәғил ҡыҙы Ғилмияза, мин һине эҙләп килдем. Исемем — Садиҡ.

Айбикә сыға, ҡулында ҙур төргәк, һаба.

**Ғилмияза.** Ай! Тоҙаҡҡа эләктек, Садиҡ ағай!

**Айбикә.** Ҡурҡмағыҙ, бында — ризыҡ, ә быныһы һыуһын. Аттар кәртә артында.

**Ғилмияза.** Ах!.. Өнөммө был, әллә...

**Айбикә.** Сеү! Әүәлбай ишетер! *(Кеҫәһенән аскыс алып, Садиктың аяк осона ырғыта.)* Бығауын сис Ғилмиязаның.

**Ғилмияза.** Инәй! *(Алдына тубыклана.)*

**Айбикә.** Бармаҡтың ҡайһыныһын тешләһәң дә, ауырта... Ауырта шул, ауырта...

**Садик.** Һин Аҡ инә, әже[3]! *(Айбикә биргән ризыктарҙы, эргәһендәге калъяны ала.)* Киттек, Ғилмияза! Һаҡмар көтә беҙҙе! Ирәндек!

**Айбикә** *(туҫтак һона).* Аҡ эсмәй юлға сыҡмағыҙ, балалар. Йола шундай.

**Ғилмияза** *(аяғынан сиселгән калыптарҙы утка ташлай).* Ирәндегем көтә, Һаҡмарым! Мин ирекле! Мин йәнә ирекле ҡош, эй раббым!!!

**Айбикә.** Хушығыҙ! Хуш, килен!.. Аман булығыҙ! Йә Хоҙай! Тағы ни күрербеҙ?!

## Өсөнсө шаршау
## Беренсе күренеш

Артта икһеҙ-сикһеҙ сал ҡылғанлы дала.
Ғилмияза менән Садиҡ инә. Өҫтәре еүеш.

**Садик.** Ике көнлөк юлды бер көндә үттек. Инде ҡыуып етә алмаҫтар. Ошонда туҡтайбыҙмы әллә? Аттар хәл алһын. Эй күндәм үҙҙәре! Әйтерһең дә, барыр якты елдең еҫенән тойоп сабалар.

**Ғилмияза.** Мин ҡуркам, Садиҡ ағай! Туҡтаһаҡ... Утарбайҙан ҡурҡам... Ул әшәке...

Аттар туҡтаған, ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелә, унан Утарбай, Әүәлбай, Хоҙағабәндә инә.

**Садиҡ.** Ҡас, Ғилмияза! Ҡәбәхәттәр! *(Йәһәт кенә ян керешенә уғын ҡуйып, атып ебәрә.)*

**Утарбай**. Беҙҙән ҡотола алмаҫһың, истәк!

Утарбай ҡолай. Үҙәк өҙгөс итеп аттар кешнәй. Ҡаҙаҡ егеттәре һәм Садиҡ араһында көрмәкләшеү, һуғышыу китә. Утарбайһыҙ ҡалған егеттәр тиҙҙән бирешә.

**Садиҡ.** Ҡастылар.

**Ғилмияза** *(йәшенгән еренән сығып).* Уғың Утарбайға тейҙеме?

**Садиҡ.** Шуға… Бик ҡаты ҡысҡырып һыуға ҡоланы. Тик бына аттар әрәм булды...

**Ғилмияза.** Аттар?!

**Садиҡ.** Береһе мал булғандай түгел, икенсеһенең уҡ башағы һыртын ярып үткән.

**Ғилмияза.** Инде нишләйбеҙ? Их, аяҡтарым... Элекке кеүек һауһаҡ булһам, йүгереп кенә ҡайтыр ҙа инем бит...

**Садиҡ.** Ошонда туҡтайбыҙ. Төндә ял итәйек, таңда йәнә юлланырбыҙ.

**Ғилмияза.** Ҡабат килһәләр?

**Садиҡ.** Килмәҫтәр... Йән бит аяулы. Кибенәйек.

**Ғилмияза.** Ағай, һин бик көслө лә, мәргән дә икәнһең!

**Садиҡ** *(кейемдәрен сисеп, киптерергә элә. Усак яға башлай).* Тормош өйрәтте. Күп нәмәгә өйрәтте ул мине. Башта шәкерт инем. Уҡырға, яҙырға, көнсығыш шиғриәтенең татлы серҙәренә төшөнөргә өйрәттеләр. Атай-әсәй ваба сиренән икеһе бер көндә донъя ҡуйғас, һуҡыр өләсәйем, уҡыған китаптарымды тоҡсайға тултырҙы ла: “Ошоларҙан яҙмаһаң, динеңде лә, телеңде лә онотмаҫһың,” — тип арҡамдан ҡағып, үткенсе урыҫ сауҙагәренә ултыртып ебәрҙе. Аҙаҡ ҡаҙаҡ далаларына барып сыҡтым. Көтөү көтөп, ҡашығаяҡ ямап, йән аҫраным...

**Ғилмияза.** Ә мине нисек эҙләп таптың?

**Садиҡ.** Уныһы — икенсе тарих. Ах, йырла әле, Ғилмияза! Тауышың наҙға һыуһаған, етемлектән сарсап кипкән йәнемә дауа булғандай...

**Ғилмияза.** Был илкәйҙәрҙең дә, ай, аттары
Ҡырас яллы, көмөрө билле икән.
Төн яғынан иҫкән емшек елдәр
Урал буйҡайынан килә икән...

Тыуған яғыма яҡынлашҡан һайын йөрәгем күкрәгемә һыймағандай! Бөркөт бала осорған ҡаяларым! Күсемташым, Йәнгүҙәйем, Ҡараташым! Уҡалай ялтыраған Һаҡмарым, айҙай тонйораған Талҡаҫым!

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп...

Бәғеремде ярып, йыр тыуа, яңы йыр! Әгәр илемде күреү шатлығына түҙә алмайынса йөрәгем шартлаһа, күңелемдән һағыш булып эркелгән зарым халҡыма етмәй ҡалыр микән, Садиҡ ағай!

**Садиҡ.** Йырҙарың өсөн, Ғилмияза, батша булһам, батшалығымды, бай булһам, байлығымды бирер инем. Мин һиңә ҡаҡҡан күңелемдән һығылып сыҡҡан йәштәремде генә бүләк итә алам…

**Ғилмияза** *(Садиҡ ҡаршыһына үҙе лә йөгәнәкләй).* Тыуған тупрағымдан ситтә йәшәгән көнөм — төнгә, төндәрем ғазапҡа әүерелде. Үҙ төйәгемде күрмәй, яҡты донъя менән хушлашам икән тигәндә һин ҡотҡарҙың мине үлемдән, Садиҡ ағай. Әммә минең дә бит рәхмәтемде белдерерлек бер бүләгем дә юҡ…

**Садиҡ.** Һин үҙең бүләк, тик бындай бүләккә хаҡым бармы минең?

Садиҡ думбыра ала, әкрен генә сиртә. Ул бик уйсан.

**Ғилмияза.** Садиҡ ағай, тамаҡ ялғап ҡына алһаңсы?

**Садиҡ.** Аш бармай. Дала ҡояшының эҫеһе тәндән сығып бөтмәй. Һине күргәндән алып, Йософ китабында яҙылғандарға оҡшаш минең хәлем.

”Аҡылы шашты, ятһа, һис йоҡо алмаҫ,
Килтерһәләр, тәғәм ризыҡ ҡаба алмаҫ...”

**Ғилмияза** *(”Уйын”ды кабул итеп).*

”Батша һүҙен Зөләйха ҡабул ҡылды,
Йософто ҡәҙерләне, хөрмәтләне,
Үҙ ҡулы менән Йософтоң сәсен тарар,
Сәстәренә ынйы-мәрйендәр ҡушып ҡарар.
Күңел тыныслығын тамам юя барыр,
Ғишҡы еңеп, сабыры һис ҡалмаҫ имде.

**Садиҡ.** Йософ әйтер: “Әгәр ҙә һин ғашиҡ булһаң,
Ғашиҡлыҡҡа тоғролоҡто һаҡлай алһаң,
Ғашиҡлыҡҡа ысынлап та дәғүә ҡылһаң,
Был дәғүәңә берәй дәлил кәрәк имде...”

**Ғилмияза.** Зөләйха әйтер: “Әйҙә, яҡыныраҡ кил,
Рәхим итеп ҡамсыңды, Йософ, миңә бир.
Ғашиҡ булһам, ул хәҙер һиңә белдерер”.

**Садиҡ.** Йософ уға ҡамсыһын урап тотторҙо,

**Ғилмияза.** Ҡатын ҡамсыға бер өрөп, кире бирҙе.

**Садиҡ.** Ҡамсыға ут тоҡанмышын Йософ күрҙе,
Уты Йософтоң ҡулын көйҙөрөр имде”.

**Хор.** ”Аҡылы шашты, ятһа, һис йоҡо алмаҫ,
Килтерһәләр, тәғәм ризыҡ ҡаба алмаҫ...”
Күңел тыныслығын тамам юя барыр,
Ғишҡы еңеп, сабыры һис ҡалмаҫ имде.

**Садиҡ.** Һин хур ҡыҙы, Ғилмияза!

**Ғилмияза.** Ах! Ай ҡайһылай тулған бөгөн, Садиҡ ағай!

Ай күрҙем Аман менән,
Ауыҙым тулы иман менән,
Күкрәгем тулы йыр-моң менән.

## Дүртенсе шаршау
## Беренсе күренеш

Бикбау тирмәһе. Ул уйланып, моңланып ултыра, ике йәшбикәһе алмашлап таҡмаҡ әйтеп бейей. Береһе бейегәндә икенсеһе ҡумыҙҙа уйнай.

**Ҡыҙбикә.** Бейеүсенең итәгенә
Гөлйемештәр йәбешкән.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Яңы бейергә төшкән.

**Ғәмбәрә.** Иҫке-моҫҡо сыуал мейес
Көлө ҡойолоп бөтә.
Йәнең һөйгән йәрҙәр менән
Ғүмерҙәр рәхәт үтә.
Ҡара бөҙрә сәскәйеңде
Тараһам, үрер инем…

**Ҡыҙбикә.** Кит, нишана! *(Ҡумыҙын атып бәрә.)* Тағы ғишыҡ йырҙары йырлай башланысы?! Минең киҙеүем көндө үҙенең күҙенә инеп барасы...

**Ғәмбәрә.** Кит! Ул нишләп һинең киҙеүең булһын бөгөн? Әйт әле, атаһы, шуға!

**Бикбау.** Нимә тип әйтәйем?

**Ғәмбәрә.** Алдашаһың тип!

**Бикбау.** Шул ғына ҡалғайны!..

**Ҡыҙбикә.** Күпме әҙерләндем! Сәсемде зәйтүнмайҙар һөртөп тараным!

**Ғәмбәрә.** Тарағанһыңдыр инде! Һиңә ҡалған, йоҡосо, эт ялҡауы!

**Ҡыҙбикә.** Ышанмаһаң, еҫкәп ҡара! Нимә?!

**Ғәмбәрә.** Һаҫыған. Хатта эркет еҫе килә! Фу!

**Ҡыҙбикә.** Ах, һин шулаймы? Эркет еҫе киләме?

**Ғәмбәрә.** Ҡортлаған эркет еҫе килә!

Хазина инә, был икәүҙең ыҙғышҡанын,
Бикбауҙың рәхәтләнеп көлгәнен ҡарап тора.

**Хазина.** Ай алла-а! Нисә ҡарама, ошо икәү ен ора. Атаһы! Ялсылар көлә бит инде үҙегеҙҙән! *(Тирмә ишеген асып.)* Барығыҙ, сахраға сығып һуғышығыҙ!

Ғәмбәрә менән Ҡыҙбикә күҙҙән юғала.

**Бикбау.** Шунан?

**Хазина.** Шул! *(Туҫтаҡҡа һалып ҡымыҙ эсә.)* Һауын бейәләрҙең бер килкеһен ағытырға ҡуштым. Ҡолондары, юғиһә, ҡышҡа йонсоу инер.

**Бикбау.** Иртәрәк ағыттырғанһың... Үлән ҡатмаған әле. Ҡолон нишләп бирешһен? Тағы...

**Хазина.** Тағы... Үрге йәйләүҙән сапҡын килде. Ҡалмыҡтар аңғармаҫтан килеп баҫҡан. Халыҡтың ҡайһыһы ҡайҙа ҡасып бөткән.

**Бикбау.** Ҡомһоҙ ҡоторһа, ҡойоға ҡармаҡ һалыр, ти. Ҡалмыҡтар үҙ башына ҡотора!

**Хазина.** Йәнә, Иҫкебей ҡуртым ерҙәребеҙҙе кире бирһен, Бикбау малын алып китһен тип әйтеп ебәргән.

**Бикбау.** Ул ерҙәрҙе миңә килешеү менән Ҡыҙрас ҡайнаға бирҙе!

**Хазина.** Килешеүҙең ваҡыты сыҡҡанға ни ғүмер? Иҫкебей ҙә шул майлағанды ярата бит. Барып һөйләшеп, эште көйләп ҡайтыр инең — оло кеше бит!

**Бикбау.** Ғилмияҙа өсөн үс ала ҡарт төлкө!

**Хазина.** Үрәпсемә, Бикбау! Әгәр Ғилмияҙа һиңә яҙһа, Иҫкебей Ирәндек буйҙарындағы беҙҙең малды күптән кире ҡыуҙырыр ине!

**Бикбау.** Мал, мал, мал!

Килеҡаштың: ”Тр-р, тр-р, дөлдөл!” — тигәне ишетелә. Килеҡаш инә, сарыҡтары — билбауында.

**Килеҡаш.** Һиңә кеше килгән, түрә! Йомошон әйтмәй. Бей үҙе кәрәк, ти.

**Бикбау.** Ниндәйерәк кеше?

**Килеҡаш.** Өҫтөнә ят юл туҙаны ҡунған, ә фиғеле үҙенең: ”Торойроҡ, торойроҡ! Үҫәргәндәр, торайыҡ, торайыҡ!” — тип тора!

**Бикбау.** Инһен. Саҡыр.

**Килеҡаш.** Мин... *(Сарыҡтарын кейә.)* Ошо табанды Хоҙай ниңә эттеке шикелле туҙмай торған итеп кенә яратманы икән?! Их!

Садиҡ инә, Хазина шаршау артына ҡаса.

**Садиҡ.** Әссәләмәғәләйкүм, түрә.

**Бикбау.** Вәғәләйкүмәссәләм. Әллә... Мөхәмәтсадиҡ инде?

**Садиҡ.** Хоҙай насип иткәс, ҡайтып төштөм бына, әллә... көтмәгәйнең?

**Бикбау.** Ул тарафтарға ебәргән кешеләрем бары ла буш ҡайтты, һин ниндәй хәбәр килтерҙең?

**Садиҡ.** Мин хәбәр түгел, уның үҙен алып ҡайттым.

**Бикбау.** Алып ҡайттың? Ысынды әйтәһеңме, әллә ҡолағым яңылыш ишетәме? Ҡайҙа Ғилмияҙа? Тапһаң, әжеренә тормам тигәйнем. Йөгөң еңелдән булмағандыр. *(Һандығынан бер янсыҡ ала.)* Бында һиңә өй һалырға ла, кәләш алырға ла, кәртә-ҡура нығытырға ла етерлек. Ал. Ал-ал.

**Садиҡ.** Юҡ, бей, аҡсаңды алмайым.

**Бикбау.** Нишләп алмайһың? Аҡса иҫәбе менән баһаланмаған эш юҡ донъяла. Ал, тартынма.

**Садиҡ.** Кеше йәне һәм рух азатлығы аҡса менән баһаланмай, түрә. Мин Ғилмияҙаны һиңә тип алып ҡайтманым. Мин уны бары тотҡонлоҡтан ҡотҡарҙым. Яҙмышын үҙе хәл итер, ул хәҙер үҙ илендә, атаһы йортонда. Ирекле.

**Бикбау.** Ирекле? Нимә һөйләйһең һин?! Ирекле, имеш. Бары көслө хаким ғына ирекккә эйә! Ә ҡатын-ҡыҙҙың ирке — ире түшәгендә.

**Садиҡ.** Рухҡа бығау кейҙерерҙәй хаким юҡ донъяла!

**Бикбау.** Йә, етер. Бәхәс тамам.

**Садиҡ.** Бей, ҡаҙаҡтарҙан алып киткән аттарҙың береһе юлда һәләк булды, икенсеһен килтереп еткерҙем…

**Бикбау.** Ҡаҙаҡ атына ҡалған көнөм юҡ минең.

**Садиҡ.** Әммә ул аттарҙа һинең өйөрөңдөң тамғаһы.

**Бикбау.** Нимә?! Һин ни һөйләйһең, хаин. Был ялған өсөн тиреңде тереләй тунаһаң да…

**Садиҡ.** Ат тирмәң ҡаршыһында!

**Бикбау.** Юғал күҙемдән! Ғилмияҙаны алып ҡайтҡан өсөн генә мин һине тере ҡалдырам. Юлымда башҡаса осрамағаның хәйерле. *(Сығалар.)*

Йәшеренгән еренән Хазина сыға.

**Хазина.** Ярабби! Төшөм боларғайны... Ах, Бикбау, Бикбау! *(Илап төшәгенә йығыла.)*

Ҡыҙбикә менән Ғәмбәрә инә. Ҡыҙбикә бала күтәргән.

**Ҡыҙбикә.** Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Беҙҙең бәпәй йәтеш тә!

**Ғәмбәрә.** Бир әле миңә, саҡ ҡына һикертәйем!

**Ҡыҙбикә.** Күҙен ыуа бала, йоҡоһо килгән. Анһат кәрәк быға: ул рәхәтләнеп тыу йөрөһөн, мин интегеп бала табайым да, уға һикертергә бирәйем...

**Ғәмбәрә.** Абау теле! *(Хазинаны күреп ҡала.)* Әллә илайһың инде, өлкән байбисә көндәшем?

**Ҡыҙбикә.** Ғәмбәрә булһа, бушты һөйләр ҙә торор!

**Хазина.** Илар көнөгөҙ алда әле һеҙҙең! Бей йәш кәләш килтерһә, шунда күрерһегеҙ илауҙы!

**Ҡыҙбикә.** Йәш кәләш?

**Ғәмбәрә.** Йәш кәләш?

**Хазина.** Ниңә шаҡ ҡаттығыҙ? Бей йәш бисә алмаһын өсөн берәй сара эҙләнегеҙме? Бей эргәгеҙгә ике-өс төн килмәһә, бер-берегеҙҙең күҙен соҡорға әҙерһегеҙ, ә йәш кәләш алһа?! Ул сағында айҙар буйы ир төҫө күрмәйәсәкһегеҙ!

**Ҡыҙбикә.** Ай алла! Улай уҡ ҡурҡытма әле, өлкән байбисә!

**Ғәмбәрә.** Теге... һандыҡтағы ҡытай ебәктәрен дә бей уға һыйлар микән?

**Хазина.** Улай ғына булһа! Сәсегеҙҙәге көмөштәр ҙә, ҡулығыҙҙағы алтындар ҙа ҡалмаҫ!

**Ҡыҙбикә**. Ах-ах! Беҙгә нишләргә?!

**Хазина.** Уйлағыҙ, әмәлен табығыҙ, юғиһә, иртәгә һуң буласаҡ!

**Ҡыҙбикә.** Бей бисәһе булыу анһат тип киләме икән ул ҡыҙ дүртенсе бисәлеккә?

**Ғәмбәрә.** Күрә алмағаның — мин инем! Инде ҡалайтабыҙ, көндәшем?!

Ҡыҙрас инә.

**Хазина.** Ах, ағайым! Килеп ҡайһылай яҡшы иттең! *(Ҡымыҙ һона.)*

**Ҡыҙрас** *(һыуһын эскәс).* Иҫәнлекме-һаулыҡмы, ҡарындаш? Төҫөң ҡасҡан, сырхап-фәлән китмәгәнһеңдер?

**Хазина.** Ғилмияза ҡайтҡан, ишеткәнһеңдер?

**Ҡыҙрас.** Ишетмәгән ҡайҙа? Шуны әйтергә килеп еттем дә инде.

**Хазина.** Зиһенем бутала, башым тубалдай… Мосафирҙың һүҙе дөрөҫкә сыҡһа, Бикбау Иҫкебейгә яу менән барасаҡ!

**Ҡыҙрас.** Эттән ҡалғанды арыҫлан еймәҫ, ти. Бикбау нишләтһен хәҙер Ғилмияҙаны?

**Хазина.** Ай, ағайым! Ғилмияза юғалғаны бирле тирмәһендә ойоп ятҡан ирем бөгәсә бер мосафирҙы тыңлағандан һуң, ябағаһын ҡойған тай шикелле уйнаҡлап сығып китте!

**Ҡыҙрас**. Эскә йылы индерерҙәй хәбәр бар барлыҡҡа…

**Хазина**. Хәбәр?!

**Ҡыҙрас**. Имештер, Исмәғил ҡарттың ҡыҙын Садиҡ атлы инсан тапҡан. Имештер, шул егеттең Ғилмиязаға күҙе төшкән. Имештер, шул егет уға яусы ебәрмәксе, ти!..

**Хазина**. Ә һин, ағай, был имеш-мимештән ысынбарлыҡ яһа!

**Ҡыҙрас**. Ай, ҡарындаш! Бер ҡатындың хәйләһе ун дөйәгә йөк булыр, тип белмәй әйтмәгәндәр, ахыры, әттәгенәһе! Мин…

**Хазина**. Ашҡа... ҡалмайһыңмы ни?

**Ҡыҙрас**. Бей таптыра башлар. Бында киткәнде белһә... *(Билбауын быуа башлай.)*

**Хазина.** Ғилмияза туйында ошо билбауҙы быуып халыҡ ҡаршыһына сыҡмаҡсыһыңмы?

**Ҡыҙрас.** Башҡаһы булмағас... Ярар инде, мин бит бей ҙә, тархан да түгел!

**Хазина.** Эй ағаҡайым! Алтмышҡа саҡ яңы аяҡ баҫҡан иргә ул тиклем дәртһеҙ булыу килешмәй ҙә инде?! Еңгәләр ҡартайҙы... Яңы йәшбикә хаҡында уйлаштыраһың икән тигән хәбәр сарпылғайны былай ҡолаҡҡа…

**Ҡыҙрас.** Уй юҡ түгел, әттәгенәһе. Эйе, әттәгенәһе!

**Хазина.** Эш нимәлә?

**Ҡыҙрас.** Атаһы, ҡарт шайтан, мәһәрҙе уйып һорамаҡсы. Әттәгенәһе!

**Хазина** *(күҙҙең яуын алып торған кәмәр тоттора.)* Ташла билбауыңды!

**Ҡыҙрас.** Әттәгенәһе... Ҡуй, килешмәҫ!

**Хазина.** Ҡәмәрҙе тим… йәш еңгәмә систерергә яҙһын!

**Ҡыҙрас.** Ай һүҙҙәрең! Күңелгә май айының майылай яғылдысы! Йә хуш, ҡарындаш! Ҡәмәрҙе… йәш еңгәмә систерергә яҙһын тинең бит әле! Әттәгенәһе! *(Сыға.)*

**Хазина.** Хуш. Ауыҙғынаһы кәүшәйеп, күҙгенәһе салшайып бөткән ағайыма тиклем "ҡыҙ" тип үлеп барғанда, типһә тимер өҙөрлөк минең иргә ни үпкә!.. Ах, Бикбау!

## Бишенсе шаршау
## Беренсе күренеш

Тәбиғәттең матур бер мөйөшө. Иҫкебей йәйләүе.
Ярандарын эйәрткән Иҫкебей инә.

**Иҫкебей.** Эй, Ҡыҙрас, һин ҡайҙа?

Тирмәнән Ҡыҙрас сыға, уның әле генә юлдан ҡайтҡаны күренеп тора.

**Иҫкебей.** Һай-һай, Ҡыҙрас ҡустым, һине көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табырлыҡ түгел!

**Ҡыҙрас.** Һай, түрәм! Үҙем барырға тип кейенеп тора инем… Әттәгенәһе!

**Иҫкебей.** Иҫкебейҙе үҙеңдән иҫәрерәк тип уйлама — ҡайҙа олағып йөрөүеңде белеп торам. Һин миңә шуны әйт: Бикбау ҡуртымға алған ерҙәрен ҡасан кире ҡайтара?

**Ҡыҙрас.** Ай, әттәгенәһе! Һинең ғаҡылың, сабырлығың, камиллығың алдында мин бер байғош инде. Был юлы ла, түрә, кем, Иҫкебей, сабырлыҡ күрһәтеп, ара боҙолоуға юл ҡуймаҫыңа ышанам. Бикбау — бер һуғар. Әлегә тиклем күрше хаҡын тәңре хаҡынан өҫтөн ҡуйып, тыныс, матур йәшәп киләбеҙ икән — уға бары тик һинең ғариф аҡылың, мөбәрәк холҡоң сәбәп, Иҫкебей!

**Иҫкебей.** Алтындан ҡомдо айыра белеүеңде, әлбиттә, баһалайым. Йыл ҡоро килмәһә, бәләкәй түҙергә лә булыр ине... Тағы шул да мәғлүм булһын ки: мин йыйын үткәрергә ҡарар ҡылдым, Хоҙай насип итһә, ошо йомала. Уға тиклем халыҡтың көтөүлектәрен киңәйтеп, күңелен күреп ҡуйыу хәйерле. Юғиһә бит, күңелһеҙгә күлдәк кейҙереп булмай…

**Ҡыҙрас.** Аҡылың алтын, түрә… эйе, әттәгенәһе…

Шул саҡ ураҡ күтәргән Исмәғил инә.

**Исмәғил.** Кәңәштәрберекһен, ил башлыҡтары! Әссәләмәғәләйкүм!

**Ҡыҙрас.** Вәғәйләйкүмәссәләм, Исмәғил ҡорҙаш!

**Иҫкебей**. Мин ни күрәм? Әллә инде ялан башҡорттары ла ҡышҡыға бесән әҙерләй башлаған?!

**Исмәғил.** Йыл ҡоро килгәс, йылға буйҙарын сабып, бәләкәй иғәнә әҙерләйекме тигәйнек тә, салғы йөҙөнә эләгер үлән юҡ. Үҫкән урындар Бикбау ҡулында!

**Иҫкебей.** Көҙ ямғырлы килһә, ҡурпылар. Ҡаулан шәп йылы мал асыҡмай. Ней... ҡыҙың табылған, тиҙәр. Шул дөрөҫмө, Исмәғил?

**Исмәғил.** Хоҙайҙың рәхмәте төшөп, тирмәмә ҡот ҡунып тора әле.

**Иҫкебей.** Бәләкәй аҡыл ултырып, ҡарыу йырҙарын ҡуйып ҡайтҡандыр, шәт, ҡыҙың?

**Исмәғил.** Кәмәнең юлы, йырҙың йыртығы юҡ, түрә.

**Ҡыҙрас.** Ҡыҙыңа ҡоҙа ла сығып тора икән тигән хәбәр салынғайны ҡолаҡҡа.

**Исмәғил.** Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат эйәләй!

**Иҫкебей.** Ул йөрәкле уҙаман кем була, сер булмаһа? Ә, Исмәғил?..

**Исмәғил.** Мөхәмәтсадиҡ тигән егет, үҫәргәндән.

**Иҫкебей.** Үҫәргәндән?! Ғилмияза Үҫәргәнгә бармаҫ! Бикбауҙың өс бисәне лә Бөрйәндән алғаны баштан ашҡан. Ғилмияза бөрйән йыраусыһы! Бында тыуып-үҫкән ҡыҙ бала! Нимә, әллә һинең, Исмәғил, артыҡ ҡыҙың бармы?

**Ҡыҙрас.** Исмәғилдә улар алтау бит!

**Исмәғил.** Тауҙан таш артмай!

**Ҡыҙрас.** Шаяртам, Исмәғил ҡорҙаш, Садиҡ етем кеше, ти бит. Етмәһә, үҙен бик һөнәрле зат, тиҙәр. Үҙем йортҡа индерәм. Ҡышлауҙағы өйөмдөң береһе буш, шуны бирәм! Етем ҡыуанһа — Хоҙай бергә ҡыуана, ти...

**Исмәғил.** Ҡолоҡайҙың билен һындырмай торайыҡ әле! Туй тигәс тә…

**Иҫкебей.** Сәсән күрке — ил күрке, йыйында мине данлап йыр йырлаһа, Ғилмиязаның туй сығымдарын үҙ өҫтөмә алам!

**Ҡыҙрас.** Һай, түрә, ир икәнһең!

**Исмәғил.** Төшөмдә тирмәм башына ҡош ҡунғанын күргәйнем, бәхет ҡошо булһа ярай ҙа...

**Ҡыҙрас.** Тиҙерәк ҡайтып ғаиләңде ҡыуандыр, Исмәғил! Туҡта, юлда сатырлы бер арба күренәсе?! Әттәгенәһе! Эйе шул! Ахыры, Бикбау кейәү үҙе килә! *(Йүгермәләй башлай, тиҙ генә тирмәһенә инеп, йәшел сапанын кейеп, яңы кәмәрен быуып, сыға.)* Шул! Үҙе! Кейәүем! Яҡшының ҡунағы бер көндә! Иҫкебей! Бына ҡайһылай яҡшы булды! Саҡ менән Суҡ кеүек зар вә интизар булып осраша алмай йөрөй инегеҙ...

**Иҫкебей.** Ҡыңғырау тауышы килә түгелме? Эйе, эйе! Эй эре сирттерергә ярата ла һуң кейәүең, Ҡыҙрас, кем, ҡустым! Тәһәрәткә сыҡҡанда ла таҡмай микән ул был ҡыңғырауын!

Ҡунаҡ ҡаршылап йүгереүҙәр, ығы-зығы китә. Ут һүнә.

## Икенсе күренеш

Ҡыҙылып таң атып килә, иртәнге һиллек, ҡоштар һайрай.
Ғилмияза менән Садиҡ ҡая башында таң ҡаршылай.

**Ғилмияза.** Ай яныҡайында Зөһрә йондоҙ,
Өлкәр генә ҡалҡһа, бат инде;
Уң беләккәйҙәрем талды, йәнем,
Һул беләккәйемә ят инде.

**Садиҡ.** Күлдә генә өйрәк, ай, йөҙә лә,
Күл күбеккәйҙәрен өҙә лә;
Һөйгән генә йәрең матур булһа,
Йөрәккәйең майын өҙә лә.

**Ғилмияза.** Таң атып килә, беҙҙең туй таңы!

**Садиҡ.** Мәңге бер йән — бер тән булырға вәғәҙәләшеү таңы.

**Ғилмияза.** Бәхетемдән йөрәгем күкрәгемә һыймай. Ул йә шартлар, йә осоп китер кеүек!

**Садиҡ.** Һин иплә. Ҡая башынан ҡолай күрмә, ҡая бейек!

**Ғилмияза.** Был ҡаянан ҡоламайҙар, ә осалар. Аттар осһа, толпарға әүерелә, егеттәр осһа — бөркөткә.

**Садиҡ.** Ҡыҙҙар осһа?

**Ғилмияза.** Ҡыҙҙар осһа — аҡҡошҡа! Юҡ, һүҙемде кире алам. Аҡҡошҡа әүерелергә ярамай: ишенән яҙған аҡҡош йәшәй алмай.

**Садиҡ.** Бәғерем минең. Йөрәк нурым. Бөтә ғүмерем һине көтөп үтте. Һине эҙләп, күпме юлдар гиҙҙем, ахыр сиктә, килеп таптым. Әммә йәнем һаман өҙгөләнә…

**Ғилмияза.** Өҙгөләнә?! Ә ниңә?

**Садиҡ.** Мин бит һиңә барыһын да һөйләп бөтөрмәнем. Ике йыл элек ҡаҙаҡтар менән араны өҙгәс, мин Бикбау бейгә көтөү көтөргә ялландым. Бер саҡ Бөрйән йыраусыһы Ғилмияза юғалған тигән хәбәр

таралды. Бикбау бей үҙе минең янға килеп, һине эҙләп табып алып ҡайтыуымды үтенде.

**Ғилмияза.** Ышанмайым! Бының булыуы мөмкин түгел! Ул минең дошманым! Ҡарыу йырым өсөн Бикбау үҙе мине ҡаҙаҡтарға тоттороп ебәрҙе!

**Садиҡ.** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был дөрөҫ.

**Ғилмияза.** Һис ни төшөнмәйем. Һин мине бер әсирлектән икенсеһенә алып ҡайтмаҡсы инеңме?!

**Садиҡ.** Юҡ, Ғилмияза. Юҡ. Үлтерһәләр ҙә! Мин һинең ихтыярыңдан тыш һис ни ҡылмаç инем. Һин миңә мөхәббәттең ҡайнар тынын, бәғер иретер татын тойҙорҙоң. Бәхетемде ҡабат юғалтыр өсөн тапманым мин. Әммә дөрөҫөн әйтмәһәм, күңелемдә төйөр ҡалыр ине...

**Ғилмияза.** Йәнем, Хоҙай һине үҙе миңә юлландырған!

**Садиҡ.** Бөгөн туй. Унан инде беҙҙе бер кем дә айыра алмаç.

Шул саҡ баштан-аяҡ ҡоралды Бикбау һәм уның ярандары килеп инә.

**Ғилмияза.** Ай!

**Садиҡ.** Һин?!

**Бикбау.** Төшөмдә йыр ишетеп уяндым. Ваҡытһыҙыраҡ килһәм, бигәйбә!

**Садиҡ.** Ғилмияза менән осрашыуыбыҙҙың сәбәпсеһе һин булдың. Туйға саҡырам һине, түрә!

**Бикбау.** Мин һинән икенсерәк саҡырыу көткәйнем. Аманатҡа хыянат иткәнгә хөкөм берәү! Шулай ҙа мин өçтөнлөктө ғәҙел көрәштә иçбатлауҙы хуп күрәм. Алышмы, атышмы, уҙаман?

**Садиҡ.** Һуңланың, түрә, туй бөгөн була!

**Бикбау.** Кемдең малын кем еймәй ҙә, кемдең йәрен кем һөймәй. Һин уны эҙләп алып ҡайтҡас та минең ҡулға тапшырырға тейеш инең!

**Садиҡ.** Ләкин ул әйбер түгел тапшырырға! Ғилмияза үҙе хәл итте кемгә булырға!

**Бикбау.** Аҡылыңа кил, Ғилмияза! Ниңә һин был йолҡошто һайланың? Садиҡ һиңә хәйерселектән башҡа ни бирә ала?

**Ғилмияза.** Яратҡан йөрәктә ялған булмай! Һин мине бер һаттың ҡаҙаҡҡа!

**Бикбау.** Был — ялған!

**Садиҡ.** Ҡаҙаҡтан ҡайтҡан аттағы инәүҙе ҡара, бей!

**Бикбау.** Юлдан кит яҡшы саҡта, Садиҡ! Урлауҙы Иçкебей менән Ҡыҙрас ойошторған! Аҡса бирҙем, алманың… Яҡшылыҡты аңламаның…

**Садиҡ.** Ғилмияза мине ярата. Аҡса түгел, мал түгел, Хоҙай хәл итер беҙҙең яҙмышты. Кит, Ғилмияза! Түбәндә көт!

Садиҡ һуғышҡан саҡта яҙа баçа һәм ҡаянан оса.

**Ғилмияза.** Йәнем! Ул… *(Иçтән яҙа.)*

**Бикбау.** Беҙҙең яҙмышты, ысынлап та, Хоҙай үҙе хәл итте, Ғилмияза. Һин бөгөндән минеке!

## Өсөнсө күренеш

Исмәғил тирмәһе. Ул икегә бүленгән. Бер яғында — сирле Ғилмияза менән Исмәғил. Икенсе яғында — Сәғилә.

**Сәғилә** *(шаршауҙы күтәреп).* Донъяла башҡа эше бөткән кешеләй булып, һиңә әйтәм, шул мөйөштән китә алманың.

**Исмәғил.** Сеү! Уята күрмә! Әле генә йоҡлап киткән кеүек булды. Мулла саҡырып, ясин сығартырға микән әллә... *(Сыға.)*

Хазина инә, ул бөркәнсек ябынған.

**Хазина**. Һаумыһығыҙ... Сәғилә әхирәт... был һинме?

**Сәғилә**. Һауғынабыҙ... Кем тип әйтәйем... Әллә Хазина инде?!

**Хазина**. Сеү! Кеше ишетмәһен...

**Сәғилә**. Ах! Ниңә улай баҫып тораһың! *(Оло мендәр алып Хазинаның аҫтына һала, икенсе бер мендәрҙе арҡаһына терәтә, аяҡтарының саңын һыйпап-һыйпап ала.)* Ярлы тип тормай... әҙәмгә һанап…

**Хазина**. Кәрәк кәрәккә төшөрә, Сәғилә. *(Ҡуйынынан матур шәл сығарып Сәғиләнең яурынына һала.)* Минең бында икәнде бәндәнең белмәгәне яҡшы булыр ине, Сәғилә.

**Сәғилә**. Уй! *(Шәлде ябынып, осоноп.)* Беҙ бит әхирәттәр, Хазина!

**Хазина**. Ғилмиязаның... хәле нисек?

**Сәғилә**. Әллә инде... ята шунда, шыңшып...

**Хазина**. Кире һүр Ғилмиязаны, Сәғилә! Был никахҡа юл ҡуйырға ярамай, әхирәт!

**Сәғилә**. Мин ни... үгәй ҙәһә ул миңә. Үгәйҙең ана инде — уты көйһөн! Атаһы бар бит уның, ул ни тиер...

Исмәғилдең тамаҡ ҡырғаны, инеп килгәне ишетелә.

**Сәғилә.** Ай, Хазина! Һин, зинһар, минең ирҙең күҙенә салынма! Юҡһа, бөтә эште бөлдөрөрһөң! Мин үҙем атаһының уң яғына сығып һөйләшермен!

**Хазина** *(сыға башлап).* Ир баш — ҡатын муйын. Теләһәң, һин уның башын бора алаһың! Яҡшылығыңды онотмам — ярҙам ит?! *(Сыға.)*

**Исмәғил.** Быныһы кем булды?

**Сәғилә.** Асыҡ ишектән кеше инмәҫ булырмы? *(Ғилмияза ятҡан түшәкте һыпыра тартып алып.)* Тор, шыңшып ятма көсөгөн юғалтҡан кәнтәй эт кеүек!

**Исмәғил.** Сеү! Бала ауырый тип тормайһың!

**Сәғилә.** Нимәһе “сеү”, ҡыҙ китте — ҡый китте. Нимә ебеп төштөң?

**Исмәғил.** Ебемәнем. Шаңҡыным! Бикбау мәһәргә ун биш баш йылҡы малы, биш һауын һыйыр, бер арба, бер атҡа йүгән-өпсөндәр, йәнә илле баш һарыҡ вәғәҙә итте...

**Сәғилә.** Йә Хоҙа-ай! Әлхәмдуллилла! Минең ҡыҙҙарыма әләкһә шундай кейәү! Ғилмияза! Ишетәһеңме? Яман ағасҡа аҫылынғансы, яҡшы ағас үҙеңде баҫһын. Һин инде, атаһы, әйткәндәренә өҫтәп, миңә төлкө тун, ситек, камзул, уҡалы елән һорарға онотма! Әлхәмдуллиллаһи, йә Хоҙай! Ултырмайым әле, туй тигәс тә... *(Сыға.)*

**Ғилмияза** *(һаташып тороп ултыра).*

Берәй ваҡыт тамырынан ҡан алдырһа,
Табип уның тамырына бысаҡ һыҙһа,
Шул саҡта ҡаны ағып ергә төшһә,
Ер өҫтөнә Садиҡ исеме яҙылыр имде.

**Исмәғил.** Сеү, балам, һаташаһың, балам! Әсәйеңә китап ене ҡағылғайны, һиндә лә шул уҡ сир...

**Ғилмияза.** Ситтәр табанымды ярып ҡыл һалдылар. Үҙемдекеләр йөрәгемде телгеләп тоҙ һала! Атай, бына ҡара йөрәгемә: ул тик әрнеүҙәрҙән тора! Тотма мине, атай! Мин дә китәйем! Садиҡ саҡыра мине! Ашығайым! Ишенән яҙған аҡҡош йәшәй алмай, атай!

**Исмәғил.** Ай алла! Ғишыҡ ярлылар өлөшөмө ни, ҡыҙым?! Барҙың барлығы тейә. Һеңлеләреңде уйла, Ғилмияза! Уларҙа ла бит минең ҡаным! Йырлап ҡына йәшәп булмай, балам!

**Ғилмияза** *(тамам иҫенә килә).* Мин һиңә рәнйемәйем, атай. Ләкин… Ҡан, дан, золом көҫәгән был донъяға мин һыймайым! Эх! Ниңә мин бер һабантурғай ғына булып тыумағанмын…

Һары ла ғына сәсем, ай, билемдән,
Китмәҫ тә генә инем илемдән.
Нисек итеп китмәй тора алайым,
Атаҡайым ҡыуғас өйөнән.

Сәғилә, ҡыҙҙар, еңгәләр инә.

**Сәғилә.** Һаман ҡара-ҡаршы ҡарашып, буҙлашып тик ултыраларсы? Һиңә әйтәм, сыҡ, тирмәне йыйыштыраһы, Ғилмиязаны кейендерәһе бар. Һарыҡ бәйләгәнмен, салып бир ашнаҡсыларға!

**Килендәр.** Әйҙә, Ғилмияза, кейенергә…

**Ҡыҙҙар.** Сәстәреңде тарап үрәйек… Үҙеңә бер ҡарап ҡалайыҡ! Их, Ғилмияза! Бей бисәһе булып алғас, күҙ һалып та ҡуймаҫһың инде беҙҙең кеүектәргә! *(Барыһы ла сыға, Сәғилә яңғыҙы ҡала.)*

**Сәғилә.** Уф! Көндәш кеүек күрә инем үҙен, әлдә китә! Әлдә оҙаҡ ултырманы! Атаһының ҡолағына төшөрөр кәрәк: ситек-күлдәк өҫтөнә миңә йәнә баса тун, ебәктән шәл, бейек үксәле ҡыҙыл итек һораһын. Шул сағында мин… байбисә Хазина кеүек ҡайҡая биреп, ҡыя баҫып… Ай-һай ҡыян был Хазина! Мине бер кешмир шәлгә һатып алмаҡсы! Ә Ғилмиязаның юлына — көл! Ҡабат ҡайта торған булмаһын!

Сәғилә көл борҡотоп йөрөгәндә тирмә ишеге асыла, Хазина күренә.

**Хазина.** Инергә… яраймы, әхирәт?

**Сәғилә.** Аһ, аһ! Һин һаман быңдамы ни?! Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған тигәндәй...

**Хазина.** Ахыры, бер ҙә үҙгәрмәгәнһең, Сәғилә...

**Сәғилә.** Үҙгәреп ни… Беҙҙе бит ирҙәребеҙ көндәш уттарында көйҙөрмәй. Фу, тфу, балаҫты ҡағыштырайым тигәнсә...

**Хазина.** Телең дә элеккесә…

**Сәғилә.** Бөтәһе лә үҙебеҙ менән, байбисә! Бына бит: Хоҙай насип иткәс, туғанлашып та торабыҙ. Ғишыҡ тигәнең ярлыны, байҙы айырмай икән, әхирәт! Бөтә йыйындарға Бикбау бей оло бисәһе менән йөрөй икән тип һөйләйҙәр ине, беҙҙең ҡыҙҙы алғас, ҡунаҡ арбаһынан төшөп ҡалырһың инде, әхирәт!

**Хазина.** Ярама тоҙ һипмә, Сәғилә! Әсе теллемен тигәс тә, саманы онотма.

**Сәғилә.** Мин бит әүәлгесә, әхирәт… үҙ итеп кенә… Ир бирмәк — йән бирмәк. Уныһын ғына аңламайыммы? Эй-й-й, әхирәт… Бикбау бейҙе әйтәм: урланған-хурланған, тип тә тороу юҡ. Ғишҡы шулай ныҡ төштөмө икән Ғилмиязаға, әллә йыраусы тигән даны ҡыҙыҡтырҙымы? Мә, һалҡын айран эс, янған йөрәгеңә тыуған шишмә һыуың ял булып төшөр…

**Хазина.** Айраның шәп, һалҡын. Өс көн инде ауыҙыма тәғәм ризыҡ алмағанға.

**Сәғилә.** Эй ҡыуанам ирем бай булмағанға!

**Хазина.** Ах, Сәғилә, телеңдең осо баллы ла, төбө ҡортло, һин, ысынлап, үҙгәрмәгәнһең. Саҡ ҡына ла!

**Сәғилә.** Ха-ха-ха!

Бикбау инә.

**Бикбау.** Ғилмияза! *(Хазинаны күреп.)* Һин?!

**Хазина.** Бикбау!

**Сәғилә.** Уй! Кейәүгә күренеш алмаҫ элек тап булдым да ҡуйҙым! Уй, ҡайһылай оят инде, уй!.. *(Аяк остарына ғына баҫып юк була.)*

**Бикбау.** Нисек баҙнат иттең бында килергә?

**Хазина.** Тыңла мине, Бикбау! Кеше көлдөрмә!

**Бикбау.** Бына һин үҙең кеше көлдөрмә! Хәҙер үк ҡайт. Аҡ тирмәлә йәш көндәшеңде ҡаршы алырға әҙерлән!

**Хазина.** Ах, Бикбау! Йәнем!!! Күҙеңде аусы сәме томалаған!

**Бикбау.** Аусы сәме? Ә йыйында, бөтә ғәләм алдында, бүрек ташлап ант итеүемде ни тип уйлайһың?

**Хазина.** Уҫаҡ ағасында алма үҫмәй, йәнем! Һинең илеңә тәүләп аяҡ баҫҡан сағында уҡ үҙенең ҡарыу йырҙары менән һине, һинең бейлек дәрәжәңде мәсхәрәләп киткән ҡыҙ бит ул!

**Бикбау.** Атты ауыҙлыҡ өйрәтә, байбисә! Ниңә өндәшмәйһең?!

**Хазина.** Ах! Ҡулдарың түгел, сыбырткың ҡағылыуға ла зарыҡҡанмын, йәнем!

**Бикбау**. Эй Хазина! Иҫкебейҙең кешеләре Ғилмиязаны ҡаҙаҡтарға Бикбау үҙе аттарына ҡушып биреп ебәргән тип һүҙ тарата! Нахаҡ бәлә таҡҡаны өсөн Иҫкенең минең алда теҙләнеп, бөтә халыҡ алдын-

да ғәфү үтенеүен талап итәсәкмен, ә үтенмәһә, мин яу менән киләм Иҫкегә!

**Хазина.** Юҡ! Был мөмкин түгел. Ҡан ҡәрҙәш халыҡтың бер-береһенең боғаҙынан алыу ирлек түгел!.. Ниһайәт, берләштек, мәңге туғанлаштыҡ тигәндә... Урыҫ түрәләр үҙеңде өрмәгән ергә ултыртмай торғанда…

Тирмә ишегендә ялсының башы күренә.

**Ялсы**. Иҫкебей килә!

Ярандары оҙатыуында Иҫкебей, Исмәғил, Ҡыҙрас һәм башҡалар инә.

**Исмәғил**. Хуш киләһең, бей! Байрамыбыҙҙың түрендә бул!

**Иҫкебей**. Иҫкенең танауына сирттем тиһеңме инде, Бикбау?

**Бикбау**. Донъя — ҡуласа, Иҫкебей. Бикбауҙың хәленән килмәгән эш юҡ икәнен күрҙегеҙме инде?

**Иҫкебей**. Ғилмияза... үҙе ҡайҙа?

Еңгәләре оҙатыуында Ғилмияза инә.

**Еңгәләр**. Беҙ бында, бей.

**Иҫкебей**. Ғилмияза! Сәсәнлегең өсөн халҡың һине аҡ кейеҙгә баҫтырып күтәрҙе. Хәҙер килеп илең ырыҫынан көләһеңме? Үҙеңде ҡаҙаҡҡа мал шайы ла күрмәй тоттороп ебәргән Бикбауға бисәлеккә бараһыңмы?

**Бикбау** *(кылысын кынынан һурып).* Был — нахаҡ!

**Иҫкебей**. Ҡыҙма, Бикбау! Ҡаҙаҡтарҙан ҡайтҡан атта — һинең өйөрөңдөң тамғаһы! Ә Ҡыҙрас ҡайнағаңа бынауы йәшел ебәк Бохара сапаны менән Сәмәрҡәнд билбауы күктән килеп төштө тиһеңме? Эй, ярандар! Нимә ҡарап тораһығыҙ?! Әйтелгәнде еренә еткерегеҙ: ҡыуығыҙ Бикбауҙың малдарын Ирәндектән! Ҡыҙрасты, һатлыҡ йәнде, ҡулға алығыҙ!

**Бикбау**. Минең кешеләргә тейгән һәр бер уғың, бишәү булып кире үҙегеҙгә ҡайтасаҡ!

**Иҫкебей.** Әйткәнде үтәгеҙ!

**Ҡыҙрас**. Әттәгенәһе! Хазина, ҡарындаш…

**Хазина**. Ах, Бикбау! Иҫкебей! Тыңлағыҙ: Ҡыҙрас ағайыма... йәшел сапан менән был билбауҙы мин һыйланым, мин — Хазина байбисә! Барыһына мин, бары мин ғәйепле, ай алла!

**Бикбау.** Ҡыҙрас... ҡайнаға, был дөрөҫмө?

**Ҡыҙрас.** Әттәгенәһе! Ни бит... яңғыҙ ҡарындаш бит...

**Иҫкебей.** Минең хөкөм ҡаты булыр һиңә, Ҡыҙрас! *(Ярандарына.)* Ҡулға алығыҙ хыянатсыны!

**Бикбау.** Ах, мин ни ишетәм… Был дөрөҫмө, Хазина?

**Хазина.** Башҡаса мин… нишләй ала инем?!

**Бикбау.** Дошманды ситтән эҙләмә — ул еңең эсендә ултырыр тигәндәре ошо булалыр... Арттан килеп бысаҡ ҡаҙаның, Хазина!

**Хазина.** Бикбау! Мин ғүмер буйы һин тип йән аттым, һинең абруйың өсөн...

**Бикбау.** Ҡара йылан!

**Хазина.** Балаларыбыҙ хаҡына!

**Бикбау.** Йоғонма миңә, хыянатсы! Талаҡ, талаҡ һиңә, Хазина! Талаҡ!

Сәғилә инә.

**Сәғилә.** Ҡыҙ әҙер. Оҙатыу... ҡасан, Бикбау түрә? Иртәгәме...

**Бикбау.** Иртәгәгә ҡалдырмайым. Бөгөн. Хәҙер үк оҙатып алам Ғилмиязаны!

**Исмәғил.** Шулай… тиҙме ни?!

**Сәғилә.** Башын биргәс, ҡалған яғын тотоп тороп булмай, атаһы. Еңгәләре, кейендерегеҙ Ғилмиязаны!

**Ғилмияза** *(башкаларға арты менән әйләнгән Хазинаға карай.)* Мине Хазина байбисә үҙе кейендерһен.

**Хазина.** Мин?! Ләкин...

**Бикбау.** Ғилмиязаның һорауын... үтәгеҙ!

Бөтәһе лә ҡарап тора. Еңгәләр һәм Ғилмияза алға сыға.

**Хазина** *(үҙен кулға алып, йола аткарып).*

Башың яланғас тормаһын,
Кей башыңа ҡашмауың.
Күкрәгеңде биҙәп торһон,
Кей түшеңә селтәрең.

**Ғилмияза.** Көсләп асҡан күҙҙең яҡтыһы юҡ! Һин мине ғәфү ит, байбисә!

**Хазина.** Йола шулай ҡуша, көндәшем!

**Ғилмияза.** Мин аңланым һине, байбисә! Ике ырыу бер-береһенә ҡаршы яу аcһа, ожмах баҡсаһылай еребеҙ ҡан менән һуғарыласаҡ, халыҡ ҡырыласаҡ! Һин шуға ҡаршы көрәшкән кеүекһең. Мин дә быға юл ҡуя алмайым.

**Хазина.** Ах, Ғилмияза! Мин һинең алда гонаһлымын!

**Ғилмияза.** Илама, көндәшем. Йәшеңде яттар күрмәһен.

**Хазина.** Мин йәштәремдән оялмайым, Ғилмияза!

**Ғилмияза.** Йола шулай ҡуша, көндәшем!

Уйынсылар инә. Еңгәләре Ғилмиязаны етәкләп, Исмәғил ҡаршыһына килтерәләр.

**Еңгәләр.** Ҡаршыңда торған атайыңа һүҙең әйтеп, ҡулың бир, Ғилмияза!

**Ғилмияза.**
Ирәндеккәй буйы яландыр,
Яландары төп-төп ҡылғандыр,
Атаҡайым, инде мин китәмен,
Тәҡдирҙәрем шулай яҙғандыр.
Атаҡайым мине ситкә бирҙең,
Ҡарыу йырҙарымдан туйҙыңмы?
Яулы ғына илгә тотоп бирҙең,

Көн күрә алмаһындай, тинеңме?
Иртәнсәккәй тороп йыр йырлаһам,
Таңғы йоҡоларҙан уяттым.
Бикбау бейҙең, атай, хәтере өсөн
Һөймәгәнгә биреп, илаттың…

Еңгәләре Ғилмияҙаны Сәғилә ҡаршыһына килтерә.

**Ғилмияза.** Күк йөҙөндә йөҙгән таңғы айҙың
Шәүләләре төшөр битеңә.
Ҡанлы йәштәр түгеп илаһам да,
Ҡыҙыллыҡтар килмәй битеңә.

**Еңгәләр.** Әйҙә инде, кейәү, ҡыҙҙы бейергә саҡыр. Йола шуны талап итә.

Уйынсылар, еңгәләр, ҡыҙҙар таҡмаҡ әйтә, Бикбау бейергә төшә.

**Уйынсылар.** Ил аралап килгәнһең,
Ат тирләтеп елгәнһең.
Алыҫ ерҙәге һылыуҙы
Әллә төштә күргәнһең.
Ҡыҙың һайла үҙеңә,
Ал ҡыҙыңды бейе лә.
Матур ҡыҙға күҙең төшкәс,
Беҙ күрәйек һине лә.

**Бикбау.** Әйҙә, кәләш, бергәләп бейейек, йола ҡушҡанды үтәйек. *(Бикбау Ғилмияҙаны бейергә төшөрә.)* Абау, бармаҡтарыңдың һалҡынлығы! Өшөйһөңмө әллә?

**Ғилмияза**. Уларҙан Садиҡ ҡәберенең һалҡынлығы сығып бөтмәгән.

**Бикбау**. Мин уларҙы тыным менән йылытырмын!
Бей бисәһе булғас, рәхәтлектә
Оноторһоң үткән михнәтте.

**Ғилмияза.** Эй, Бикбау бей!
Һөйләгәс һүҙ —
Әйтһәң генә икән кәрәкте:
Бей бисәһе булыу
Баҫамы инде
Рухы ҡыйратылған йөрәкте?!

**Уйынсылар** *(Бикбауға туҫтак менән кымыҙ һоноп).*
Теҙгенеңдә уйнай толпар аты,
Ҡыҙ күҙләргә уйлап килгәндә.
Ҡалталары тулы тәңкә менән
Услап алыр бүләк биргәндә.

**Бикбау.** Һай, шаяндар! Тәңкә кәрәкме? *(Кеҫәһенән услап-услап тәңкә алып, тирә-яғына ташлай. Ҡыҙ-ҡыркын, йәш-елкенсәк йүгерә-йүгерә тәңкә йыя.)* Тағы кәрәкме? Мәгеҙ! Мәгеҙ!

**Уйынсылар** *(Иҫке бейгә туҫтак менән кымыҙ һоноп).*

Көрәгә асыу, ҡымыҙ һалыу —
Табынсының эше ул.
Беҙгә башлап уйын асыу
Ҡунаҡтарҙың бәҫе ул!

**Иҫкебей** *(туҫтаҡты кире бирә).* Эһем…

**Бикбау.** Ил йолаһына хатта батша ла буйһона: Ғилмиязаның йырҙарын тыңларға, Ҡаратыңдан ҡалған тоҡом Айҡашҡаның сапҡанын ҡарарға… туйыма рәхим ит, бей!

**Иҫкебей.** Йәмәғәт! Ҡайһы ырыу көслө, ханды шул ҡуя, ҡайһы ырыу үҫле — ҡанды шул ҡоя! Уҙамандар!..

**Ғилмияза** *(төркөмдән айырылып, ҡаяға үрләй башлай).* Туҡтағыҙ! Мине тыңлағыҙ! Халҡым! Ҡарыу йырҙарымда алдашманым. Хәҙер күрәм: аҡҡош йырын һеҙгә еткерергә ваҡыт етте. Йырымдың һүҙҙәре ҡаҙаҡ далаларынан Уралыма килеп еткәнсә табанымдан һарҡҡан ал ҡан менән сал сәсле ҡылған баштарына яҙылды; моңо ишенән яҙған аҡҡоштоң һуңғы иңрәүе булып күкрәгемде йыртып сыҡты. Илемде һәм халҡымды, Күгемде һәм Еремде яратыуымдың билгеһе итеп, был йырымды һеҙгә ҡалдырам!

Һаҡмар ғына аға төшкә табан,
Урал тауы ята көн битләп.
Үҙ илкәйҙәремә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...

Халыҡ йыр ҡөҙрәтендә шаңҡып торған арала
Ғилмияза ҡаянан айырыла.

**Халыҡ.** Аһ!
**Исмәғил.** Балам!
**Бикбау.** Ғилмияза!

Һауала аҡҡош мамығын хәтерләткән ҡаурыйҙар оса.
Тауҙар Ғилмиязаның йырын ҡабатлағандай:

Үҙ илкәйҙәремә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...

---

[1]Куртым — аренда.
[2]Жатаҡ — йәйләүһеҙ, көтөүлектәрһеҙ ҡалған ҡаҙаҡтар.
[3]Әже — оло йәштәге ҡатын-ҡыҙға хөрмәт менән өндәшеү.

*Өфө, 2003—2005 йй.*

*(Драмала Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан яҙып алынған "Ғилмияза" йырының һүҙҙәре һәм Ғилмиязаның поэтик мираҫы файҙаланылды).*